ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

26-2 ноябрь - декабрь (ҡырпағай - аҡъюлай)

2022

№47 (1037)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*Иғтибар! "Киске Өфө" гәзите менән бергә булыусы аңлы, зыялы уҡыусыларыбыҙҙы 5 декабрҙән 15 декабргә тиклемге ун көнлөктә ПР905 индекслы "Киске Өфө"гә 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ташламалы хаҡ менән 642 һум 38 тингә яҙылырға саҡырабыҙ. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

*МӨХӘРРИРИӘТ.*


БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡарҙан еңелербеҙме?



5

Етмеш төрлө һөнәр эйәһе



8-9

Мин үҙемде сәхнәлә таптым, ә асылымды һаман эҙләйем



11

Мәңгелеккә бер аҙым



13


ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

**?**

***Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университеты ҡушылып, Өфө фән һәм технологиялар университетын барлыҡҡа килтерҙе. Ике уҡыу йортонон берләшеүенән ниндәй ыңғай үҙгәрештәр көтәһегеҙ?***

***Айбулат ХАЖИН, Башҡортостан Республикаһының мәғариф һәм фән министры:*** Өфө фән һәм технологиялар университеты 2023 йылдан башлап 1 миллиард һумлыҡ юғары финанслау алыуы ихтимал. Бының өсөн Рәсәйҙең мәғариф министрлығы ҡуйған өс шартты үтәргә кәрәк. Беренсеһе - вузда белем алыусы студенттар һаны 50 меңдән дә кәм булырға тейеш түгел. Әлеге ваҡытта берләштерелгән Өфө дәүләт авиация техник университеты менән Башҡорт дәүләт университетында уҡыусыларҙың дөйөм һаны 40-42 мең. Тимәк, тиҙ арала яңы вуз студенттарының һаны 7-8 меңгә артырға тейеш. Һуңғы йылдарҙа ике белем усағында ла бюджет урындарының 2-шәр меңгә артыуы был мәсьәләне хәл итеү өсөн ҡеүәт буласаҡ, әлбиттә. Икенсе шарт - ул яңы уҡыу йортонон фәнни-педагогик кадрҙарының дөйөм һанына ҡағыла. Әлеге ваҡытта унда 2,2 мең кеше эшләһә, 3,5 мең кешегә тиклем арттырыу талап ителә. Өсөнсө шарт - яңы вузда уҡыусы сит ил студенттары контингентын артырыу. Беҙ әле үк был талапты үтәйбеҙ тип тулы ышаныс менән әйтә алабыҙ, сөнки 2022/2023 уҡыу йылында сит ил студенттары 7,5 мең кеше тәшкил итә.

БАШ ҠАЛАМ

## ТӨҘӨК ЙОРТТАРҘА ЙӘШӘЙБЕҘ



**Республикабыҙҙың баш ҡалаһы миңә үҙенең матурлығы, йәшеллеге, үҙенә генә хас булған ығы-зығыһы, мәшәҡәттәре һәм йәшәйеше менән оҡшай. Көн һайын иртән эшкә ашыҡҡан һәм кисен өйҙәренә табан юлланған кешеләр ағымы күңелемә яҡын. Уҡыу мәле етеп, балалар мәктәпкә, студенттар уҡыу йорттарына йөрөй башлағас, Өфөнөң ҙур икәнлеге айырыуса күҙгә салынды.**

Көҙгө Өфө айырыуса күңелемә яҡын, сөнки тәбиғәт тә үҙгәрә, ҡала урамдарын тағы ла йәнлерәк итеп ауыл хужалығы баҙарҙары эшләй башлай. Был ялда Киров районында үткән ошондай йәрминкәгә барып, уңыштың мул булыуына ҡыуанып ҡайттым. Рабкорҙар урамында уҙған был баҙарға республиканың 14 районы үҙенең ауыл хужалығы продукцияһын алып килгән икән. Мин Архангел, Белорет, Бөрө райондары аграрийҙарынан картуф, кишер һәм бал һатып алып ҡайттым. Хаҡтары ла тешләшмәй, сифаты ла яҡшы.

Күп фатирлы йортта йәшәүсе кеше булараҡ, миңә үҙ фатирымдың ғына түгел, ә тотош подъездың, ихатаның төҙөк, йыйнаҡ һәм матур булыуы шарт. Быйыл беҙҙең йорт подъезын ипкә килтереп, бик ҡыуандырҙылар. Беҙҙең подъезд менән бер рәттән, Өфөнөң Октябрь районында тағы ла 23 подъезда баҫҡыстар йүнәтелгән, тәҙрә һәм яҡтыртҡыстар алмаштырылған, диуарҙар һәм түбә буялған, шулай уҡ подъезға ингән ишектәр тирәһе лә рәтләнгән.

1 сентябрь Телеүҙәк яғына барғанда Пушкин урамындағы өр-яңы балалар майҙансығын асыу тантанаһын күрергә насип булды. Майҙансыҡ әкиәт мотивтары буйынса эшләнгән һәм бик күркәм урын, балаларҙың шат тауыштарынан гөрләп тора ине. Ошондай уҡ әкиәт темаһына эшләнгән балалар майҙансыҡтары күберәк булһын ине баш ҡалала, тигән теләктә ҡалабыҙ һәм улар араһында башҡорт халыҡ әкиәттәре нигеҙендә эшләнгәндәре лә булыр, тип өмөтләнәбеҙ. Шулай уҡ халыҡ эпостары, легендалары йөкмәткеһе буйынса парк һәм сквер барлыҡҡа килһә, тағы ла яҡшыраҡ булыр ине.

**Гөлсәсәк АҠБУЛАТОВА.**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

## ЮҒАРЫҒА ҠАРАП...

### фекерләргә өйрәтә



**"Киске Өфө" гәзитен даими рәүештә яҙҙырып, уҡып барам, бик оҡшай. Халҡыбыҙ тарихы, туған тел мәсьәләләре, күп балалы өлгөлө башҡорт ғаиләләре, билдәле шәхестәр, заман башҡорттары хаҡындағы мәҡәләләр бик фәһемле һәм ундай материалдарҙы башҡа мәғлүмәт сығанаҡтарынан табыуы ауыр, сөнки күп гәзиттәр ваҡ-төйәк хәбәрҙәр, ниндәйҙер ғәҙәттән тыш ғибрәтле, сенсацион хәлдәр хаҡында яҙырға әүәҫләнде, ә ҡайһы бер баҫмалар күбеһенсә бигерәк ҡоро тел менән яҙылған рәсми әйберҙәрҙән тора.**

(Дауамы 2-се биттә).

12+

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ЮҒАРЫҒА ҠАРАП...

## фекерләргә өйрәтә

(Башы 1-се биттә).



Шуға күрә мин үҙем өсөн тематикаһы, маҡсатлы йүнәлеше буйынса иң оҡшаған һәм күңеләмә яҡын ошо "Киске Өфө"нө уҡыйым. Әлбиттә, ҡайһы бер материалдар ябай уҡыусы өсөн ҡатмарлыраҡ та, уҡыуы, аңлауы ауырыраҡ та булып киткеләй, мөхитебеҙгә юғары кимәлдә ҡараш ташлап алыу, донъяуи фәлсәфәгә төшөп киткеләгән урындары ла була, ләкин мин быны аңлап ҡабул итергә тырышам, сөнки редакция коллективы шундай юғарылыҡ ҡуйып ижад итә икән, тимәк, юғарыға ҡарап фекер итергә әйҙәй уҡыусыны - был насармы ни? Киреһенсә, донъя ваҡлыҡтарынан арынып, исмаһам, гәзит уҡығында булһа ла рухи хәлебеҙ, кешелек донъяһы кимәле хаҡында уйланып алыу ҙа кәрәк, тип иҫәпләйем.

"Киске Өфө" гәзитенең йүнәлеше, дөйөм маҡсаты хаҡында һөйләгәнендә, уның баш мөхәррире Гөлфиә Янбаеваның "Уйлана белгәндәр өсөн ул "Киске Өфө" тигән һүҙҙәре хәтеремә уйылып ҡалған. Ысынлап та, был, бер яҡтан, гәзитте уҡымаған, хатта бар тип тә белмәгән һәм беҙҙең арала һәүетемсә йәшәп ятҡан манҡорттар, моңһоҙҙар баҡсаһына тос ҡына таш ул, аңлағанға - ишара.

Милләттәштәребеҙҙең рухи донъяһына юл ярыусы, күңелен үстереүсе булараҡ, гәзитебеҙ дин темаһын да даими һәм системалыраҡ алып барһа ине, тигән теләгем бар, сөнки һуңғы осорҙа иман юлына килгәндәрҙең арта барыуы ҡыуаныслы хәл, гәзитебеҙ уларға ла терәк, белем сығанағы булырға тейештер. Ауыл халҡының хәле үҙегеҙгә яҡшы мәғлүм, төрлө гәзиткә яҙылыу форсаты юҡ, шуға күрә бер гәзиттән мөмкин тиклем төрлө яҡлы мәғлүмәт алғы килә.

Мин шуныһына гәжәп итәм: әйтеп китеүемсә, "Киске Өфө"нө мәғлүмәтле халыҡтың, интеллигенцияның гәзите тип әйткәндәрен ишеткәнем бар, тик бына ауыл-ҡала интеллигенцияһының алғы сафында барыусы ҡайһы бер уҡытыусыларҙың бөгөн гәзит уҡымауын аңлай алмайым. Гәзиттең сыға башлауына - 20 йыл. Был үсеп етеп, йәш кеше ҡорона инген бала ғүмеренә торош. Тәрбиә мәктәбе, тигәндән, исмаһам, ике йөҙ уҡытыусы булһа ла үҙ уҡыусыларын ошо гәзитебеҙ мәҡәләләре нигеҙендә тәрбиәләй һәм уларҙа милли рух осҡоно ҡабыҙа алғанда ла, телһөйәр һәм илһөйәр, үҙ тарихы менән ҡыҙыҡһынған әллә күпме йәш кеше тәрбиәләнер ине!

**Фәннүр СОЛТАНҒОЛОВА.**
**Баймаҡ районы Ишбирҙе ауылы.**

БЫЛ АЙҘА...

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ҠӨҘРӘТЕ ...

## Мәскәүҙе ҡотҡарған



**Шулай итеп, ҡыштың - тәүге, йылдың һуңғы айы ла килеп етте. Ваҡыт еләү генә, күҙ асып йомғансы таң ата ла кис була. Селләләре, күҙ асҡыһыҙ бурандары менән интектермәй генә ҡыш та шулай тиҙ генә үтеп китһә ине, ләкин, халыҡ әйтмешләй, ҡыш бауыры оҙон: миҙгел календарында уға ла өс ай ғына бирелеүенә ҡарамаҫтан, беҙҙең климат шарттарында ул дүрт-биш айға һуҙыла.**

Ҡыш тиҙерәк үтһен тиһәң дә, был миҙгелде көтөп алған кешеләр ҙә күптер, айырыуса бала-саға. Уларға саңғы, сана шыуырға, хоккей уйнарға форсат тыуа. Өлкәндәр араһында ла хәҙер саңғы, конькиҙарға баҫҡан кешеләр байтаҡ, афарин. Уйынлы-ысынлы әйткәндә, кемдәрҙер ҡышты яңы алған тунын кейеп сығыу өсөн дә түҙемһеҙләнеп көтәләр...

Тик бына шуныһы ла бар: тиҙҙән беҙгә ул тундарҙың кәрәге ҡалмаясаҡ, тип ҡурҡыта бит әле синоптиктар. Ҡыш йылдан-йыл йылыға тарта, тиҙәр. Климат шарттары буйынса Башҡортостан шуныһы менән үҙенсәлекле: таулы районда ҙа ҡыш һалҡынса килгәндә лә, көньяҡ һәм көнбайыш биләмәләрҙә һауа температураһы минус 3-4 градусҡа йылыраҡ була. Ә бына үткән ҡыш, Башгидрометүҙәк белгестәре билдәләүенсә, һуңғы 83 йыл эсендә, 1982 йылғы рекордты ла үтеп китеп, иң йылы ҡыш булған икән. Башҡортостан гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхиткә мониторинг идаралығы белгесе Гөлназ Зәһитова һүҙҙәренә ҡарағанда, әлеге ҡышта республикала һауа температураһының йылыға тартым йүнәлеше һаҡланасаҡ. Ҡыҙғаныҫка, икенсе төркөм белгестәр декабрҙә һәм, ғөмүмән, ошо ҡышты гәҙәттән тыш ҡаты һыуыҡтар буласаҡ тип фаразлай. Дөрөҫөн әйткәндә, һауа торошона күҙәллауҙар буйынса ниндәйҙер хәҡиҡәт эҙләп, бәхәсләшеүҙәр мәғәнәһеҙ шөғөлдөр, сөнки Рәсәй биләмәләре киң һәм уның төрлө тарафында һауа торошо тары ла төрлөсә булыр. Бары тик ил һағында ҡатнашыусы ир-егеттәребеҙгә унайлы, йылы көндәр, еңеллек, еңеүле аҙымдар һәм иҫәнлек теләп кенә торайыҡ, бөгөн шунан да мөһимерәк мәсьәлә юҡ.

Аҡъюлайҙың күренекле һәм иҫтәлекле ваҡиғалар йылъяҙмаһын барлағанда иһә, ул тәүге биттәренән үк Рәсәйҙең хәрби дан көнө - Мәскәү яны һуғышында немец-фашистарға ҡаршы совет ғәскәрҙәренең хәл иткес контрһөжүмгә күскән көнө менән асыла **(5 декабрь, 1941 йыл)**. 1941 йылдың июнендә Гитлер армияһы Барбаросса планы буйынса Советтар Союзын 12 аҙнала еңергә иҫәп тотоп, СССР-ға баҫып инә һәм илебеҙ йөрәге Мәскәүгә ынтыла. Сентябрҙә "Тайфун" һөжүм операцияһын башлау

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университеты ҡушылып, Өфө фән һәм технологиялар университетын барлыҡҡа килтерҙе. Ике уҡыу йортоноң берләшеүенән ниндәй ыңғай үҙгәрештәр көтәһегеҙ?***

***Гөлфирә АБДУЛЛИНА, Өфө фән һәм технологиялар университетының Башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты деканы:*** Өфө фән һәм технологиялар университеты төҙөлөүен шәхсән үҙем дә, факультетыбыҙ ҙа тик яҡшы яҡтан ҡабул итәбеҙ. Ҙур университет - ул, әлбиттә, ҙур мөмкинлектәр. Иң тәү сиратта, матди йәһәттән ыңғай үҙгәрештәр күҙаллана. Аҡса булһа, теләһә ҡайһы проектты, идеяны бойомға ашырып була, яңы университеттың фәнни һәм педагогик потенциалы көслө, дөрөҫ ҡулланырға ғына кәрәк.

Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты ғалимдарының тиҫтә йылдар буйы йыйылған тәжрибәһе бергә тупланып, төрлө фән өлкәләрен берләштергән проекттар өҫтөндә эш киң йәйелдереләсәк. Төрлө фәнни мәктәптәр, бер-береһенә ҡамасаулыҡ итмәйенсә, үҙ йүнәлешен артабан үҫтерер, тигән ныҡлы ышаныстабыҙ.

Евразия фәнни-белем биреү үҙәгенең кампусы төҙөлөү - республикаға өмөтлө кадрҙар туплауҙың бер ысулы. Бында, тейешле шарттар булдырып, көслө абитуриенттарҙы төбәктән ситкә ебәрмәү ҙә, шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙең һәм сит илдәрҙең вуздарынан абруйлы ғалимдарҙы уҡыу-уҡытыу эшмәкәрлегенә йәлеп итеү хаҡында ла һүҙ бара. Кампус эсендә (ябай дөйөм ятаҡхана менән бутамағыҙ) биомедицина, энергетика, йәшел химия кеүек өҫтөнлөклө йүнәлештәрҙе үҫтереү буйынса проект офистары, заманса талаптарға яуап биргән туҡланыу, йәшәү урындары, китапхана һ.б. урын аласаҡ. Күрше төбәктәрҙән абитуриенттарҙы күпләп йәлеп итергә иҫәп тотола.

Әлбиттә, ағас йыҡҡанда төрлө сүп-тап осмай ҙа булмаҫ. Яңылыҡҡа ынтылған, донъя ағышынан ситләшмәгән, ваҡыт арбаһынан тәгәрәп ҡалмаҫтай кадрҙар һәр ерҙә лә, һәр саҡта ла кәрәк. Ә бына университеттың үсешен тотҡарлаған, иҫкелеккә йәбешеп ятҡан, һөнәри яҡтан камиллашмаған уҡытыусылар, әлбиттә, иләктән үткәреләсәк. Ул шулай булырға тейеш тә. Донъяуи (маҡсат, ысынлап та, шулай) кимәлдәге уҡыу йортонда башҡаса булыуы ла мөмкин түгел. Һәр аҙым студент мәнфәғәтенә, Рәсәй фәнен үҫтереү перспективаһына ҡоролорға тейеш.

Гуманитар йүнәлештә эшләгән уҡытыусылар булараҡ, әлбиттә, бер аҙ хәүеф тә бар. Глобаль киңлектә үҙ урыныбыҙҙы, милли асылыбыҙҙы, рухи ҡиммәттәребеҙҙе тейешле кимәлдә һаҡлап ҡала алырбыҙмы икән, тигән һорау факультет уҡытыусыларын борсомай ҡалмай. Шулай ҙа, аныҡ маҡсаттар ҡуйып, егәрле, маҡсатҡа ынтылыусан коллегаларыбыҙ менән "Беҙ булдыра алмаҫтай эш юҡ" тип алға ынтылабыҙ. Ойошоу стадияһында осрай торған ваҡ ығы-зығы беҙҙә лә урап үтмәҫ, моғайын. Һәр кем үҙ эшен намыҫ һәм тәүәллек менән башҡарһа, барыһы ла ыңғай хәл ителер.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Рәсәйҙә коронавирустың ике яңы варианты - "цербер" штамы асыҡланған, тип хәбәр итте федераль Роспотребнадзор. Улар ковидтың башҡа варианттарына ҡарағанда йоғошлораҡ. Роспотребнадзор мәғлүмәттәре буйынса, илдең 20 төбәгендә, шул иҫәптән Мәскәүҙә (+30,9 процент) һәм Мәскәү өлкәһендә (+4,3 процент) коронавирус йоҡтороусылар күбәйә. Ковид менән сирләүселәр араһында дауахананан тыш пневмония осраҡтары һуңғы айҙа 1,9 проценттан 2,9 процентҡа тиклем артҡан, был да хәүеф тыуҙыра.

✔Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус йоҡтороуҙың 185 яңы осрағы теркәлгән, тип хәбәр иттеләр республиканың Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан. Билдәләнеүенсә, пандемия башланғандан алып республикала бөтәһе 335 меңгә яҡын кеше коронавирус менән сирләгән. Әлеге ваҡытта 187 пациент стационарҙа дауалана, уларҙың күбеһе - ололар. Ике меңдән ашыу пациент өй шарттарында дауалана. Уларҙың 660-ҡа яҡыны-60 йәштән өлкәндәр.

✔Рәсәй Президенты указы менән Башҡортостандың мәҙәниәт министры Әминә Шафиҡова "Мәҙәниәттә һәм сәнғәттә күрһәткән хеҙмәттәре өсөн" миҙалы менән бүләкләнде. Был наградаҙы уға оператив кәңәшмә барышында Башҡортостан Башлығы тапшырҙы. Миҙал 2021 йылдың авгусында булдырылған. "Был награда - Башҡортостандың 15 мең мәҙәниәт хеҙмәткәренең ҡаҙаныштарын таныу ул. Радий Фәрит улы, һеҙҙең һәм Хөкүмәттәге коллегаларҙың ярҙамынан тыш ошондай уңыштарға ирешеп булмаҫ ине", - тип билдәләне Әминә Шафиҡова.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә республика муниципалитеттары етәкселәренә Яңы йыл байрамы осоронда мобилизацияланған яҡташтарыбыҙҙың балаларына етди иғтибар бүлергә ҡушты. "Алда барлыҡ ғаиләләр өсөн мөһим ваҡиға - Яңы йыл. Ирекле батальондар хәрбиҙәренең һәм мобилизацияланғандарҙың балаларына байрам мөхитен булдырырға тейешбеҙ", - тине Радий Хәбиров. "Башинформ" хәбәр иткәнсә, республика Яңы йыл шыршыһы 22 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында уҙа.

ниәтендә фашист командованиеһы бөтөн көсөн - 78 дивизияһын, 1700 танкын, 14 мең орудие һәм минометын, 1390 самолетын, 1,9 млн кешелек ғәскәрен Мәскәү янына туплай. Ҡыҙыл армия тарафынан 1,2 млн кеше, 96 дивизия, 900 танк, 7600 орудие, миномет һәм ни бары 667 самолет гитлерсыларға ҡаршы ҡуйыла. Мәскәү өсөн ҡаты алыш башлана. Ике тапҡырға көслөрәк ҡоралланған фашист ғәскәрҙәре Мәскәүгә яҡын уҡ килеп етә: ни бары 25-40 км ара ҡала, ләкин ил ҙурмыш хәл ителгән был осорҙа дошман Ҡыҙыл армия һәм уның ғына түгел, бөтөн совет халҡының быға саҡлы күрелмәгән иҫ киткес ҡаршы тороу көсөнә, фиҙаҡәрлегенә осрай. "Бер аҙым да сигенмәскә! Беҙҙең артта - Мәскәү!" тигән девиз менән һуңғы һулыштарына ҡәҙәр ауыһыҙ һуғыша совет һалдаттары, партизандар, ополченецтар. Шулай итеп, гитлерсылар армияһының "ҡеүәте" хаҡында миф юҡҡа сығарыла, халҡыбыҙҙың фиҙаҡәр илһөйәрлек ҡеүәте ысын мәғәнәһендә легендаларға тиң көс булыуы иҫбат ителә.

Шуға бәйле Мәскәү өсөн һуғыш ҡаһармандары - Советтар Союзы Геройҙары 28 панфиловсы, Виктор Талалихин, Зоя Космодемьянская һәм башҡа исемдәре билдәле һәм билдәһеҙ ҡалған совет патриоттары күҙ алдына баҫа. Тарих буйынса мәктәп дәреслектәре һәм программалары менән таныш булмағанлыҡтан, әйтеүе ҡыйын: Бөйөк Ватан һуғышында һынылыш яһаған Мәскәү өсөн һуғыш хаҡында уҡыусылар ҡыҙыҡһынып уҡырлыҡ итеп яҙылғанмы икән? Тарих дәреслектәрен академик һәм ялҡытҡыс рәсми тел менән түгел, ә балаларҙы ҡыҙыҡһындырырлыҡ, йәнле һүрәтләү ысулдары, иң мөһим ваҡиғаларҙан ҡыҫҡа-ҡыҫҡа өҙөктәр, документаль хикәйәләр, фотодокументтар менән йәнләндереү хаҡында бик күп һөйләшеүҙәр булғайны инде. Ил Президенты Владимир Путиндың, тарихты дәреслектәрҙән генә өйрәнмәйҙәр, тигәне лә тағы бер иҫкә төшә.

Эйе, бына ошо Мәскәү яны һуғышы хаҡында ғына ла күпме кинофильм бар! Ғөмүмән, бөгөн Бөйөк Ватан һуғышы хаҡындағы иң шәп совет осоро фильмдарын мәктәптәрҙең актовый залында коллектив ҡарауҙы ойоштorғанда бик урынлы булыр ине, тимәксемен. Һәр хәлдә, бөгөнгө йәш быуындың теләһә ниндәй һынауҙар мәлендә лә иң ҡеүәтле көс - илһөйәрлек икәнен аңлауҙары, Бөйөк Ватан һуғышы ҡаһармандары миҫалында, шулай уҡ әлеге ваҡытта Украиналағы Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусы ағайҙары, туғандары өлгөһөндә ана шул көскә инаныуҙары кәрәк.

Был айҙа түбәндәге иҫтәлекле көндәр билдәләнә: Хоккей көнө, Бөтә донъя СПИД-ҡа ҡаршы көрәш көнө **(1)**, Билдәһеҙ һалдат, Юрист, Инвалидтар **(3)** көндәре, Информатика, Халыҡ-ара ҡосаҡлашыу **(4)** көндәре, Мәскәү өсөн һуғышта совет ғәскәрҙәренең контрһөжүмгә күсеүе **(5, 1941)**, Иҡтисад һәм социаль үҫеш хаҡына халыҡ-ара ирекмәндәр көнө **(5)**, Граждандар авиацияһы, Рәссам, 1917 йылда Ырымбурҙа 3-сө Бөтөн башҡорт ҡоролтайы асылыуға 105 йыл тулған көн **(7)**, Коррупцияға ҡаршы халыҡ-ара көрәш, Геноцид енәйәте ҡорбандарын иҫкә алыу **(9)**, Кеше хоҡуҡтары, Бөтөн донъя дуҫлыҡ **(10)** көндәре, Халыҡ-ара тау көнө **(11)**, РФ Конституцияһы **(12)**, Башҡорт теле **(14)** көндәре, Һөнәри бурыстарын үтәгәндә һәләк булған журналистарҙы иҫкә алыу, Халыҡ-ара сәй **(15)** көндәре, Стратегик тәғәйенләнештәге ракета ғәскәрҙәре **(17)**, ЗАГС органдары хеҙмәткәрҙәре, Мигранттар **(18)**, Фәҡирҙәргә халыҡ-ара ярҙам **(19)**, Дәүләт хәүефһеҙлеге хеҙмәткәрҙәре, Кешеләрҙең халыҡ-ара теләктәшлек **(20)** көндәре, Өфө ҡурсаҡ театры асылыуға - 90 йыл (1932), Энергетика **(22)**, БР Конституцияһы **(24)** көнө, РФ Ҡотҡарыусылар **(27)**, Халыҡ-ара кино **(28)** көндәре, СССР төҙәлөүгә - 100 йыл **(30 декабрь, 1922-1991)**.

**Аҡъюлайҙа тыуғандар:**

**2 -** шағир, әҙәби тәнҡитсе, филология фәндәре докторы, тарих фәндәре кандидаты, профессор, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты **Фәнил Күзбәковҡа - 70 йәш** (1952).

**3 -** яҙыусы, журналист, БАССР-ҙың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, БР Яҙыусылар берлегенең Мөхәмәтша Буранғолов исемендәге премияһы лауреаты **Йыһат Солтановҡа - 90 йәш** (1932).

**5 -** бейеүсе, Башҡортостандың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты **Риф Ғәбитовҡа - 70 йәш** (1952).

**8 -** тележурналист, прозаик, драматург, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты **Сәрүәр Суринаға - 65 йәш** (1957).

**10 -** прозаик, тәржемәсе, драматург, филология фәндәре кандидаты **Шәүрә Шәкүроваға - 55 йәш** (1967).

**15 -** Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры артисы, Башҡортостандың халыҡ артисы, атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре **Рәмилә Ҡобағошоваға - 65 йәш** (1957).

**-** композитор, Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре, Ш.Бабич исемендәге йәштәр дәүләт премияһы лауреаты **Урал Иҙелбаевҡа - 50 йәш** (1972).

**16 -** Рәсәй дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре, Федерация Советының Фән, мәғариф һәм мәҙәниәт комитеты рәйесе, Башҡорттарҙың милли-мәҙәни автономияһы Федераль Советы рәйесе **Лилиә Ғүмәроваға - 50 йәш** (1972).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

КӨНАУАЗ

# ТЫЙЫЛА ТОРҒАН...

## сир рәүешле боҙоҡлоҡтар

**Ошо көндәрҙә Рәсәй Дәүләт Думаһына традицион булмаған енси мөнәсәбәттәрҙе киң матбуғат сараларында, интернетта, рекламала, әҙәбиәттә һәм кинола пропагандалау һәм аҡлауҙы тыйыу хаҡындағы закон проекты индерелде. Тәү ҡарауға беҙҙең ижтимағи мөхит өсөн бер ни тиклем сәйерерәк тойолған проблема ни өсөн уны дәүләтебеҙҙә закон ҡабул итеү юлы менән хәл итеү кимәленә күтәрелде һуң?**

Хәҙерге замана бына шуныһы ла сер түгел: үҙҙәрен бар донъяға кеше хоҡуҡтарын яҡлау һәм һаҡлау үҙәге итеп иғлан итә килгән Көнбайыш - Европа илдәре һәм АҠШ - ошо сиргә тарығандарҙы, йәғни традицион булмаған енси йүнәлеште үҙ итеүселәрҙе яҡлаусы хоҡуҡи акттар ҡабул итеп кенә ҡалмай, ошо ғәҙәти булмаған енси мөнәсәбәттәрҙе пропагандалауҙы ла ирекле бер күренеш итеп ҡарай. Был илдәрҙә даими уҙғарыла килгән гей-парадтар, гәзит-журналдарҙа гомосексуализм һәм лесбиянлыҡ мөхәббәтен аҡлаусы мәҡәлә-интервьюлар, шундай енси ориентациялы сәнғәт әһелдәрен, спортсыларҙы киң реклама селтәренә йәлеп итеү, интернет селтәрендә генә түгел, кино залдарында ошо тема менән бәйле нәфис һәм порнофильмдар күрһәтеү - былар инде уларҙа ғәҙәти күренешкә лә әйләнеп бөткән. Шуныһы тағы ла ғәжәберәк: әгәр ҙә мәғәр уларҙа бер үк енесле кешеләр ғаилә ҡора икән, ул закон менән рөхсәт ителә, төрлө матбуғат саралары, телевидение каналдары улар хаҡында тапшырыуҙар төшөрә. Эш хатта шуға барып етте - бындай ғаилә ҡорғандарға етем балаларҙы уллыҡҡа йә ҡыҙ итеп алыуға рөхсәт бирелә! Быны, ғөмүмән, меңәр йылдар буйына һаҡлана килгән ғаилә институтын, аталыҡ-әсәлек төшөнсәләрен тамырынан юҡ итеүгә генә тинләп булалыр.

Ошо проблема хаҡында һүҙ алып барғанда замандаштарыбыҙға әҙәми заттар араһында ғәҙәти булмаған енси йүнәлештең нисек, ниндәй сәбәптәр арҡаһында барлыҡҡа килеүе хаҡында ла аңлатма биреү зарурлығы бар.

Белебеүеҙсә, әҙәм балаһы донъяға биологик зат булараҡ килә, уның организмы, атаинәһенең енес күҙәнәктәрендәге парлы хромосомаларға ярашлы, ир йә иһә ҡатын-ҡыҙ енесле булып ярала. Әлбиттә, енси яҡтан малайҙарҙың ир-егет, ҡыҙ балаларҙың ҡатын-ҡыҙ булараҡ биологик үҫеше - тәбиғи хәл. Улай ғына ла түгел, инде меңәр йылдар дауамында кешелек йәмғиәте, ижтимағи мөхит ир балала - тик ирҙәргә, ҡыҙ балала ҡатын-ҡыҙға хас сифаттарҙы тәрбиәләүҙе маҡсат итеп ҡуя.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

***Башҡорт дәүләт университеты менән Өфө дәүләт авиация техник университеты ҡушылып, Өфө фән һәм технологиялар университетын барлыҡҡа килтерҙе. Ике уҡыу йортоноң берләшеүенән ниндәй ыңғай үҙгәрештәр көтәһегеҙ?***

***Илдус ШӘРӘФУЛЛИН, Өфө фән һәм технологиялар университетының Физик-техник институт директоры вазифаһын башҡарыусы:*** Өфө фән һәм технология университеты Рәсәй Федерацияһында студенттар һаны буйынса ла, хеҙмәткәрҙәр һаны буйынса ла тәүге ун университет иҫәбенә инәсәк. Был уға күп һанлы үҫеш программаларында, шул иҫәптән "Өҫтөнлөк - 2030" программаһында ҡатнашыу мөмкинлеге бирә. Йәғни был яңы лабораториялар асылыуы, яңы йыһаз алыныуы тигән һүҙ. Башҡорт дәүләт университеты быйыл ике йыл элек уҡ ошо программаға инеп, Физика-технологик институтҡа 43 миллион һумлыҡ заманса ҡорамал һатып алғайны. Был фәнни тикшеренеүҙәр сифатына ла йоғонто яһай.

Әгәр ошо программа арҡаһында беҙ үҫеш өсөн тағы ла күберәк финанстар алһаҡ, әлбиттә, вуз студенттары, магистранттар, аспиранттар, уҡытыусылар, хеҙмәткәрҙәре грант алып ҡына тормошҡа ашырған фәнни тикшеренеүҙәр һаны артасаҡ, сөнки берләшеү яңы проекттарҙы генерациялаясаҡ, шулай уҡ ошо проекттарҙы тормошҡа ашырыуға янынан-яңы гранттар алыуға булышлыҡ итәсәк. Был мәсьәләләр бер-береһе менән ныҡ бәйле. Бынан тыш, ике университеттың берләшеүе һөҙөмтәһендә белем биреү эшмәкәрлегендә заман талаптарына яуап биргән көнүҙәк йүнәлештәр барлыҡҡа киләсәк.

Шулай уҡ яңы университет территорияһын үҙ эсенә алған кампус булдырыу ҙа ыңғай күренеш булып тора. Шуға күрә студенттар яңы эре уҡыу йортон ойоштороуҙың барлыҡ ыңғай яҡтарын үҙҙәрендә тояласаҡ, ә вуз Рәсәйҙең университет беләме картаһында, дөйөм алғанда, Рәсәй фәне картаһында сағыу урын алып торасаҡ.

**Зөйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмәләште.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Федераль таможня хеҙмәте мәғлүмәттәре буйынса, 2022 йылдың ғинуар-сентябрендә Башҡортостандың тышҡы сауҙа әйләнеше йыллыҡ сағыштырмала 13 процентҡа, экспорт күләме 17,1 процентҡа артҡан, импорт 1 процентҡа кәмегән. Был хаҡта Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров белдерҙе: "Тышҡы сауҙа әйләнеше буйынса тәүге унау иҫәбендә - Ҡытай, Ҡаҙағстан, Латвия, Нидерландтар, Беларусь, Һиндостан, Төркиә, Финляндия, Германия, Үзбәкстан. Ошо илдәрҙең бишәүһе менән тығыҙ эш алып барабыҙ, Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән халыҡ-ара кимәлдәге хеҙмәттәшлекте көсәйтергә кәрәк", - тине Радий Хәбиров.

✔Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһе Максим Забелин республиканың иң яҡшы эшсәндәренә Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың дәүләт наградаларын тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында данлыҡлы ҡурайсы Азат Айытҡолов II дәрәжә "Ватан алдындағы ҡаҙаныштары өсөн" ордены миҙалы менән билдәләнде. Рәссам Сергей Игнатенкоға "Рәсәй Федерацияһының атҡаҙанған рәссамы" исеме бирелде. РСФСР-ҙың халыҡ артисы, легендар Нурия Ирсаева Салауат Юлаев орденын алды.

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров үҙенең указы менән республиканың оператив штабы составына үҙгәрештәр индерҙе. Штаб Рәсәй Президентының 19 октябрҙәге указы положениеларын ғәмәлгә ашырыу өсөн ойошторолғайны. Башҡортостан буйынса Тәфтиш комитеты, республика буйынса федераль суд приставтары хеҙмәте идаралығы һәм федераль почта хеҙмәте етәкселәре, Башҡортостан таможняһы начальнигы һәм Куйбышев тимер юлы начальнигы урынбаҫары уның составына инде.

✔Рәсәй Президенты Владимир Путин бала тыуыуға һәм уны ҡарауға бәйле берҙәм пособие тураһында законға ҡул ҡуйҙы. Документ дүшәмбе, 21 ноябрҙә, рәсми хоҡуҡи мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған. Ошо законға ярашлы, 2023 йылдың 1 ғинуарынан балаға 17 йәш тулғансы универсаль пособие, шулай уҡ йөклө ҡатын-ҡыҙҙарға пособие индерелә. Пособие тәғәйенләгәндә ғаиләнең мөлкәт менән тәьмин ителеше һәм атаәсәнең мәшғүллеге иҫәпкә алына.

ҠЫҪҠАСА

# ГУМАНИТАР ЯРҘАМ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Хөкүмәттең опер়атив кәңәшмәһендә махсус хәрби операция үткәрелгән биләмәгә гуманитар йөк әҙерләп ебәреү өсөн республика координация үҙәген булдырыуы тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйыуын хәбәр итте.** Уны Башҡортостан Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин етәкләй. Гуманитар йөк йыйыу өсөн логистика үҙәге "Башсельхозтехника" предприятиеһында ойошторола. Ғаризалар йыйыу менән республика Хөкүмәте шөғөлләнә. "Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусылар өсөн тауарҙарҙы һәм кәрәк-яраҡтарҙы логистика үҙәге аша ғына оҙатыуҙы маҡсатҡа ярашлы тип иҫәпләйем. Күңел ҡушыуы буйынса гуманитар ярҙам күрһәткәндәрҙең барыһына ла ҙур рәхмәт. Айына ике тапҡыр ҙур ылау ебәрергә иҫәп тотабыҙ", - тине Радий Хәбиров. Башҡортостан Республикаһы Башлығы хакимиәте етәксеһе Максим Забелин һүҙҙәренсә, гуманитар йөк Башҡортостандың ирекле батальондары яугирҙарына, мобилизацияланғандарға, шулай уҡ шефлыҡҡа алынған хәрби госпиталдәргә оҙатыла.

✓ **Махсус хәрби операцияла ҡатнашыу осоро пенсия тәғәйенләгәндә икеләтә стажға иҫәпләнә.** Был хаҡта 22 ноябрҙә Рәсәй Ҡоралды көстәренең ихтыяжын тәьмин итеү буйынса координация советы ултырышында Михаил Мишустин белдерҙе. Яңылыҡ махсус хәрби операцияла ҡатнашҡан граждандар өсөн страховка пенсияларына һәм мобилизацияға тиклем Алыҫ Төньяҡта йәки зыянлы производстволарҙа эшләгәндәр өсөн ваҡытынан алда пенсияларға ҡағыла. Бынан тыш, Хөкүмәт Дәүләт Думаһының башланғысын хупланы, уға ярашлы, ҡоралы көстәргә ҡайтырға теләгән хәрби пенсионерҙарға, әгәр улар махсус хәрби операция барышында эш хаҡы аҙыраҡ булған вазифа биләһә, алған пенсия күләме һаҡлана. Шулай уҡ Премьер-министр бынан алда мобилизацияланған граждандарҙың эш урындарын һаҡлап ҡалыу тураһында ҡарарҙы иҫкә төшөрҙө.

✓ **Федераль хөкүмәттең бойороғона ярашлы, дәүләт органдары, муниципалитеттар, төрлө ведомстволар ҡарамағындағы ойошмалар һәм судтар 2022 йылдың 1 декабренән "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәрендә рәсми аккаунттар булдырырға һәм алып барырға тейеш.** Бойороҡ июлдә "Дәүләт органдары һәм урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлеге тураһындағы мәғлүмәттән файҙаланыуҙы тәьмин итеү тураһында"ғы Федераль законға индерелгән үҙгәрештәрҙе тормошҡа ашырыу өсөн әҙерләнгән. Хәҙер дәүләт органдары үҙҙәренең эшен күрһәтеү өсөн социаль селтәрҙәрҙә рәсми сәхифәләр булдырырға бурыслы. Һүҙ уҙғарылған саралар тураһында отчеттар, көнүҙәк мәсьәләләр буйынса комментарийҙар, көнүҙәк белешмә мәғлүмәттәре хаҡында бара. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, Башҡортостандың власть органдары, ведомстволар һәм муниципалитеттар етәкселәре бер нисә йыл дауамында был күрһәткесте үтәп килә. Әйтәйек, "Бәйләнештә" һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәренән тыш, улар телеграм-каналдар алып бара.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ТАБИПЛЫҠ ОШОНДА БАШЛАНА

**Өфөлә Башҡорт дәүләт медицина университетының 90 йыллығын билдәләнеләр. Тантанала Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ҡатнашты һәм БДМУ-ның иң яҡшы уҡытыусыларына Рәсәйҙең һәм республиканың дәүләт наградаларын тапшырҙы.**

"Ошо йылдар эсендә беҙҙең уҡыу йортонда 60 меңдән ашыу квалификациялы табип һәм провизор әҙерләнгән. Уларҙың күптәре хәҙер - билдәле белгестәр, ғалимдар, медицина һәм фәнни ойошмаларҙың етәкселәре. Бөгөн ул заманса фәнни-белем биреү комплексына әүерелде, лайыҡлы рәүештә Рәсәйҙең иң яҡшы медицина вуздары иҫәбенә инә. Был беҙҙең һаулыҡ һаҡлау системаһы өсөн кадрҙар әҙерләгән төп урын. Меңләгән табип һәм студент коронавирус инфекцияһына ҡаршы көрәш мәктәбен тамамланы. Махсус хәрби операция башланғас, табиптарыбыҙ йәнә алғы һыҙыҡта. Табиптарҙың дүрт бригадаһы азат ителгән биләмәләрҙәге госпиталдәрҙә эшләп ҡайтты. Рәхмәт һеҙгә", - тине Радий Хәбиров вуз коллективын һәм студенттарын юбилей менән ҡотлап.

Башҡорт дәүләт медицина университеты ректоры Валентин Павлов билдәләүенсә, бөгөн вузда 14 меңгә яҡын студент белем ала, шул иҫәптән 57 яҡын һәм алыҫ сит илдәрҙән. 18 ғилми мәктәп эшләй, биология, фармация, робототехника һәм башҡа тармаҡтар менән берләштерелгән тиҫтәләрсә ғилми йүнәлеш әҙерләнә. Университет Евразия ғилми-белем биреү үҙәге сиктәрендә юғары технологиялы проекттарҙы, "Өҫтөнлөк-2030" программаһы грантын гәмәлгә ашыра. Медицина техникаһы, генетика, репродуктив һаулыҡ, медицина реабилитацияһы буйынса берлектәге программалар эшләй.

Һәм тағы. Юғары уҡыу йортоноң 90 йыллығына тура килтереп, Башҡорт дәүләт медицина университетының төньяҡ кампусы студенттары өсөн яңы ятаҡ асыу тантанаһы ла уҙҙы. Төньяҡ кампус Репин урамында урынлашҡан элекке 5-се һөнәрселек училищеһында ойоштороладә. Бина лар 1953 йылда төҙөлгән төп корпустан һәм уның эргәһендәге 1976 йылда һалынған корпустарҙан тора. "650 урынлыҡ ятаҡ - университеттың төньяҡ кампусының беренсе сираты, ә киләһе йылдың 1 сентябрендә беҙ баш ҡалабыҙҙың төньяҡ өлөшөндә медицина йүнәлеше буйынса белем биреүҙе тергеҙербеҙ. Беҙҙең колледж Черниковкала урынлашҡан дауалау учреждениелары өсөн яҡшы ярҙам булыр", - тип билдәләне БДМУ ректоры, Рәсәй Фәндәр академияһы академигы Валентин Павлов.

# ЯҠТАШТАР ЯРҘАМЫНА АРНАЛА

**Башҡортостанда "Атайсал" проекты 2021 йылда республика Башлығы Радий Хәбиров башланғысы менән старт алды. Проект уңышлы яҡташтарҙың үҙҙәренең тыуған ҡалаһына йәки ауылына ярҙам итеүенә йүнәлтелгән. Ул бөгөн үҙенең тәүмаҡсаты сиктәренән уҙып, республикала ҙур күләмле эшкә әйләнде. Был хаҡта Асҡын районында үткән "Атайсал - минең кесе Ватаным" тип аталған форумда ҡатнашыусылар һөйләне.**

Биләмәләрҙе төҙөкләндереү буйынса башҡа проекттар һәм саралар ҙа бар, әммә форумда кешеләрҙең тыуған төйәгенә ярҙам итеү теләге күпкә һөҙөмтәлерәк булыуы билдәләнде. 2021 йылдан бығылға йылдың 15 ноябренә тиклем "Атайсал" проекты порталында 11844 заявка урынлашытырылған, шуның 742-һе эш өҫтөндә, 11036-һы тамамланған.

"Атайсал" - уникаль проект. Уға шул хәтлем күп заявка бирелгән һәм тамамланған проекттары булған бер федераль һәм республика программаһын да белмәйем. "Атайсал"дың суммаһы бик ҙур - 1,5 миллиард һум, 900 миллионға яҡын һумы йәлеп ителгән. Бюджеттан бер тин дә бүленмәне", - тине БР Башлығы Хакимиәте етәксеһенең эске сәйәсәт буйынса беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев.

- Асҡын районында 2021 йылдан 608 проект тәҡдим ителгән. Уларҙың барыһы ла тиерлек ғәмәлгә ашырылған", - тине Асҡын районы хакимиәте башлығы Динис Йосопов. - Учреждениелар, мәсеттәр, шишмәләр төҙөкләндерелде, илһөйәрлек, мәҙәни, спорт сараларын ойоштороуҙа финанс ярҙам күрһәтелде. Мин Асҡын районында тыуҙым, үҫтем. Ошонда уҡыным. Мәктәпте тамамлағандан һуң 20 йыл Өфөлә эшләнем. Әммә һәр ваҡыт районым тураһында уйланым, яҡташтарым менән аралаштым һәм бына йыл ярым тыуған төйәгемдә эшләйем. Радий Хәбиров әйтеүенсә, өйҙә эшләүе яҡшыраҡ. Яҡташлыҡ минең өсөн ябай ғына һүҙ түгел. Ул - ҙур яуаплылыҡ. Беҙҙең команда тыуған районыбыҙ сәскә атһын өсөн ҡулынан килгәнсә тырыша. Эшебеҙ һөҙөмтәһе бар, әммә туҡтап ҡалырға йыйынмайбыҙ, үҙебеҙгә яңы маҡсаттар билдәләргә кәрәк, киләсәккә пландар күп...

Республика Башлығы грантына конкурс тураһында иғлан итеү форумдың мөһим өлөшө булды. Ул 2023 йылда мини-грант форматында үтәсәк. Гранттың максималь күләме - 500 мең һум. "Беҙ бөгөн коммерция булмаған сектор, урындағы власть органдары һәм бизнес вәкилдәре өсөн белем биреүсе ғәмәли эштәр һәм грант ярҙамы үҙенсәлектәрен аңлаттыҡ. Үҙ-ара ярҙам итеп эшләүҙең төрлө моделен ҡараныҡ. Коммерция булмаған ойошмаларҙың грант ярҙамын ыңғай ҡабул иттеләр. Уларға ихтыяж барлығы асыҡланды. Конкурста бөтәһе лә ҡатнаша ала, былтыр финанс ярҙам алмағандар ҙа", - тине Башҡортостан Башлығының Гранттар фонды генераль директорының беренсе урынбаҫары Роман Низамутдинов. Форум эстафетаны Ҡырмыҫҡалы районына тапшырыу менән тамамланды.

# БЕҘҘЕҢ ҺЫУ АҪТЫ КӘМӘҺЕ...

**"Өфө" һыу аҫты кәмәһе Рәсәйҙең Хәрби-диңгеҙ флоты составына инде. Санкт-Петербургта "Адмиралтейские верфи" предприятиеһында 636.3 "Өфө" проектының ҙур дизель-электр һыу аҫты кәмәһендә Рәсәйҙең Хәрби-диңгеҙ флагын күтәреү тантанаһы уҙҙы.**

"Беҙ Тымыҡ океан флотына барасаҡ тағы бер хәрби берәмекте ҡабул итәбеҙ. Был проекттың һыу аҫты кәмәләре үҙҙәренең ышаныслы булыуын раҫланы. Ҡара һәм Урта диңгеҙҙә, шулай уҡ Арктикала ҡуйылған бурыстарҙы уңышлы башҡарып сығыу уларҙың юғары хәрби сифаттарын иҫбатланы. Беҙҙең флот бөгөн тағы бер һыу аҫты кәмәһе - "Өфө" субмаринаһы менән тулыланды", - тине тантана барышында Рәсәй Хәрби-диңгеҙ флотының баш командующийы Николай Евменов.

"Март айында беҙ субмаринаны һыуға төшөрөү сараһында ҡатнаштыҡ. Ә хәҙер, тейешле һынауҙарҙы үткәндән һуң, унда Андреев флагын күтәрҙеләр. Тиҙҙән һыу аҫты кәмәһе Тымыҡ океан флотына хеҙмәт итергә ебәрелә. Республикабыҙ өсөн был - оло хөрмәт. Әлеге сара минең өсөн дә оло әһәмиәткә эйә. Өлфәт Мансур улы Мостафиндың һыу аҫты кәмәһенә Башҡортостандың баш ҡалаһы исеме бирелһен өсөн етди эш башҡарғанын беләһегеҙ. Республиканың данлы диңгеҙ тарихы, флотта хеҙмәт иткән яҡташтарыбыҙҙың исеме менән бәйле изге традициялары бар. "Өфө" экипажына мотлаҡ ярҙам итербеҙ", - тип яҙҙы Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Декабрь айында Башҡортостанда биатлон буйынса Рәсәй кубогы уҙғарыла. Был хаҡта социаль селтәрҙә республиканың спорт министры Руслан Хәбибов хәбәр итте. 13-19 декабрҙә Өфөнөң "Биатлон" спорт комплексында ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар араһында дүртенсе этап ярыштары ойоштороладә. Рәсәйҙең 20 төбәгенән 150 спортсының ҡатнашыуы көтөлә. Башҡортостанда биатлон Өфө, Октябрьский, Стәрлетамаҡ ҡалаларында, шулай уҡ Ишембай һәм Белорет райондарында үҫешә.

✓Йыл һайын ноябрҙең һуңғы йәкшәмбеһендә Әсә көнө билдәләнә. Ошо уңайҙан Өфө мэрияһы "#Һөйөклө әсәйем"онлайн-флешмобын башлап ебәрҙе. Ҡатнашыу шарттары ябай ғына: әсәйегеҙ менән бергә төшкән матур фотоғыҙҙы һайлағыҙ. Ни өсөн әсәйегеҙ менән ғорурланыуығыҙ хаҡында яҙығыҙ, һөйөүегеҙҙе белдерегеҙ, ғүмер биргән өсөн рәхмәт әйтегеҙ. Ошо хаҡта яҙманы "Бәйләнештә"ге сәхифәгеҙгә һалығыҙ һәм "#Һөйөклө әсәйем"хештегын ҡуйырға онотмағыҙ", - тиелә мэрияның белдереүендә.

✓Өфөнөң ике төп - "Торатау" конгресс-холы эргәһендә һәм Ленин майҙанында яһалма шыршылар ҡуя башланылар. Уларҙың бейеклеге 32-30 метр. Яңы йыл атрибуты булған был конструкцияны йыйыу ҡатмарлы процесс, йыйыу, буяу өсөн 10 көн самаһы ваҡыт талап ителә. Бер майҙанда 10 кеше һәм 5 берәмек техника эшләй.

✓Өфөлә Черниковка биҫтәһендәге "Төҙөүсе" стадионында иң ҙур боҙ һырғалағы асылды. Уның майҙаны - 17 000 квадрат метр, тип хәбәр итә Орджоникидзе районы хакимиәте. Һырғалаҡ эш көндәрендә (дүшәмбенән тыш) - киске сәғәт 5-тән 9-ға, ял һәм байрам көндәрендә көндөҙгө 12-нән киске 9-ға тиклем эшләй. Өлкәндәр өсөн билет хаҡы - 100 һум, балаларға - 70 һум, 4 йәшкә тиклемге кескәйҙәргә инеү бушлай. Конькиҙы прокатҡа алыу сәғәтенә 100 һум тора.

✓Башҡортостанда 2022 йылдың 1 декабренән ҡала-ара һәм ҡала яны транспорты көҙгө-ҡышҡы эш графигына күсә."Башавтотранс" сайтында хәбәр ителеүенсә, тулыраҡ мәғлүмәтте һәм билеттарҙы bashauto.ru сайтында йәки "Башҡортостан автовокзалдары" мобиль ҡушымтаһында алырға мөмкин. Бәйләнеш өсөн телефон: 8 (347) 262-66-62.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

КӨНАУАЗ

# ҠАРҘАН ЕҢЕЛЕРБЕҘМЕ?

**Һуңғы йылдарҙа Башҡортостандың эре ҡалаларында ҡар таҙартыу темаһы йылдан-йыл ҡиҫкенләшә. Ул бигерәк тә Өфөлә көнүҙәк булып ҡала, сөнки ҡар яуғанда ҡала властары ҡәтғи тәнҡиткә дусар ителә. Шуға күрә был проблеманың төбәк кимәлендә юғары иғтибар үҙәгендә булыуына аптырарға түгел.**



Ошо көндәрҙә ҡала властарына мөрәжәғәт итеп, Республика Башлығы Радий Хәбиров: "Ҡыштың нисек буларын белмәйбеҙ, һеҙ ҡар менән көрәштә еңелмәҫкә тырышығыҙ. Өфөләр өсөн был етешһеҙлектәр ауырлыҡтар тыуҙыра. Һеҙҙең һорау буйынса техника һатып алып бирҙек, хәҙер эште яҡшы итеп ойоштороу бурысын үтәргә кәрәк", - тине.

15 ноябрҙә яуған ҡар иһә эштең нисек ойошторолоуын һынап ҡараны ла инде: ҡалала 8 балға еткән тығындар барлыҡҡа килде, ә 18 ноябрҙә иһә был күрһәткес 10 балға етте, йәғни хәрәкәт туҡтап ҡалды. Бындай хәл-торошҡа тотош проблемалар комплексы сәбәпсе һәм ҡала властары уларҙы хәл итергә тырыша, әммә финанстар сикле булыуы һөҙөмтәһендә уларҙың ҡыҫҡа ваҡытта хәл итеп булмай торғандары ла бар.

***Ресурстар ҡытлығы.*** Бөгөн ҡаланы төҙөкләндереү хеҙмәттәре, Горзеленхоз һәм СУРСИС балансында 574 берәмек коммуналь техника иҫәпләнә, уларҙың 461-е ҡар таҙартыуға йәлеп ителергә мөмкин. Шул уҡ ваҡытта, Росавтодор күрһәтмәһе буйынса, баш ҡала юлдарын таҙартыу өсөн 2432 берәмек техника талап ителә, йәғни был булғанынан биш тапҡыр артығыраҡ. Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, йыл башына ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре техника менән 20 процент ҡына комплектланған һәм уларҙың 75 проценты иҫкергән.

Быйыл барлығы 88 берәмек коммуналь техника һатып алынған. Әммә был дөйөм хәл-торошҡа әллә ни йоғонто яһамай, сөнки техника паркы ни бары 15 процентҡа ғына артҡан.

Техника етешмәүен шулай уҡ водителдәр һәм юл эшселәре дефициты ла ҡатмарлаштыра. Штат расписаниеһына ярашлы, Өфө юлдарын файҙаланыуға яуап биргән хеҙмәттәрҙә 2526 кеше (1149 водитель-механизатор һәм 1377 юл эшсеһе) булырға тейеш. 15 ноябргә ҡарата уларҙың һаны 1811 (878 водитель-механизатор, 933 юл эшсеһе) тәшкил итә. 714 урынға, шул иҫәптән 270 водитель урынына вакансия буш. Кадрҙар дефициты юлдарҙы таҙартыу сифатына һәм тиҙлегенә лә йоғонто яһай. Башҡортостан Республикаһының Торлаҡ-коммуналь хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре күрһәтеүенсә, былтыр ҡышҡыһын 130 берәмек техника водителдәр һәм урам таҙартыусылар етешмәүе сәбәпле буш тора: кешеләрҙе эш хаҡының әҙ булыуы ҡәнәғәтләндермәй.

Булған көс менән ҡар таҙартыу мөмкин булмауын аңлап, ҡала властары ойошмаларҙан өҫтәмә техника йәлеп итергә ниәтләй. Нигеҙҙә, улар ҡарҙы тейәү һәм полигондарға алып сығыу менән шөғөлләнәсәк.

***Файҙалы ғәмәл коэффициентын нисек арттырырға?*** Ҡар таҙартыу проблемаһын техника паркын арттырып ҡына хәл итеү мөмкин түгел, бында булғандарының һөҙөмтәлелеген күтәреү, йәғни йөк машинаһының ҡар тейәү урынынан уны бушатыу урынына күпме ваҡытта һәм күпме арала барып етеүе һәм кире әйләнеп килеүе мөһим. Ошоно күҙ уңында тотоп, быйыл Өфө хакимиәте ҡар бушатыу полигондары һанын арттырҙы: 11-ҙән 20-гә еткерҙе, шулай уҡ Сәғит Агиш урамында тиҙҙән икенсе ҡар иретеү пункты төҙөлә башлаясаҡ. Киләсәктә уларҙың һанын 5-кә еткереү планлаштырыла.

Ҡар таҙартыу тиҙлегенә дөрөҫ парковкаланмаған транспорт та ҡамасаулай. Был проблеманы хәл итеү өсөн Өфөлә ҡышҡы миҙгелдә айҙың таҡ һәм йоп һанлы көндәрендә туҡталҡа тыйылған өҫтәмә юл билдәләре ҡуйыла. Бик йыш автомобилдәрҙе күсереп ҡуйыу һәм хужаһыҙ техниканы эвакуациялау өсөн юлдарҙы ябыу ҙа ғәмәлдә.

Ҡайһы бер осраҡтарҙа ҡар таҙартыуға юлды тротуарҙан айырып торған бордюрҙар ҙа ҡамасаулай. Быйыл мэрия ЮХХДИ менән берлектә тикшереү үткәргән, ГОСТтың үҙгәртелгән талаптарына яуап бирмәгән 830 метр шундай арауыҡ һүтелгән. Ҡулланылған саралар комплексының һөҙөмтәһе быйыл ҡыш күренәсәк: ул үҙен аҡлаймы, әллә юҡмы?

***Аҡса ла, урын да аҙ.*** Өфөлә ҡышын хәрәкәт итеү юлдарҙағы ҡарҙы таҙартыу сифатына ғына бәйле түгел. Күп осраҡта уны ихаталар торошо билдәләй. Торлаҡ йорттар территорияһындағы ҡарҙы сығарыу баш ҡала райондарының торлаҡ-коммуналь хеҙмәтенең минималь хеҙмәт күрһәтеү исемлегенә инмәгәнлектән, был эште милекселәр дөйөм йыйылыш үткәреп, уны "йортто тәртиптә тотоу" статьяһына индереп хәл итә ала.

Күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр күп осраҡта ҡар сығарыу өсөн түләргә әҙер булмағанлыҡтан, ҡануниәт ҡарҙы, әгәр ул транспорт үтеүенә һәм йәйәүлеләргә ҡамасауламаһа, ихата биләмәһендә өйөргә рөхсәт итә. Ғәмәлдә иһә был ихаталарҙа ҙур көрт тауҙары барлыҡҡа килеүенә һәм транспортты ҡуйыу урынының кәмеүенә килтерә һәм милексәләрҙә ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Шулай уҡ ихаталарҙы таҙартыуға парковкаланған һәм ташландыҡ транспорт та ҡамасаулай. Һәм был проблеманы, үрҙә әйтеп кителгәнсә, техника һәм кеше ҡытлығы ҡатмарлаштыра. Быйыл Өфө ихаталарын таҙартыуға 144 берәмек техника әҙерләнгән, әммә уларҙың ҡайһы берҙәренә транспорт парковкаланған һәм ҙур булмаған ихаталарға инеүе бик ауыр.

**Сергей НИКОЛАЕВ.**
**"Башинформ".**

ҠЫҪҠАСА

# ШӘЛСЕЛӘРҘЕ ЛӘ КӨТӘЛӘР

**1-3 декабрҙә Өфөлә, ВДНХ-Экспо, Менделеев урамы, 158 адресы буйынса,"Өфө. Арт. Кәсеп. Сувенирҙар" VIII күргәҙмәһе үтә.** Унда Рәсәйҙең 15 төбәгенән 400 самаһы оҫта үҙҙәренең ҡулдан эшләнгән үҙенсәлекле тауарҙарын, шул иҫәптән мебель, селтәр, һауыт-һаба, биҙәүестәр, быяланан, ағастан һәм таштан эшләнгән әйберҙәрен һатыуға сығарасаҡ. Йәрминкә барышында эшлекле программа, бизнес-осрашыуҙар, оҫталыҡ дәрестәре һәм "Йыл кәсепсеһе" конкурсын үткәреү планлаштырылған. Күргәҙмәһе сиктәрендә XV "Башҡорт шәле-2022" республика фестиваль-конкурсы ойошторола. Фестивалдә оҫталар ҙа, Башҡортостандың һәм Рәсәйҙең халыҡ кәсептәре предприятиелары ла ҡатнашырға мөмкин, тип хәбәр итә республиканың Мәҙәниәт министрлығы. Программала кәзә мамығынан бәйләнгән әйберҙәр: шәлдәр, палантиндар, косынкалар йәрминкәһе, кәзә мамығынан иң яҡшы әйбер оҫталары конкурсы, бәйләнгән һәм туҡылған башҡорт шәле буйынса оҫталыҡ дәрестәре, оҫталар тураһында "Башҡорт шәле тураһында реклама роликтары" видеоматериалдар конкурсы ҡаралған.

✓ **Түбәнге Новгородта "Russian Event Awards 2022" ваҡиға туризмы өлкәһендә XI Милли премия финалы үтеүе тураһында күптәр хәбәрҙарҙыр.** Унда илдең 55 төбәгенән барлығы 314 проект күрһәтелде. Башҡортостан унда бик күп наградаларға, шулай уҡ дүрт гран-приға лайыҡ булды. Ә инде республиканың баш ҡалаһы был сарала үҙенең "Өфөлә матурлыҡ көндәре" проектын тәҡдим итеп һәм "Алтын һыуһар" асыҡ конкурсын үткәреп, "Ҡатнаш форматтағы иң яҡшы туристик ваҡиға" номинацияһында 2-се урын яуланы. Өфө 20 йыл дауамында бьюти-индустрия өлкәһендә матурлыҡ һәм мода баш ҡалаһына әүерелә. Бында косметологтар, сәс ҡырҡыусылар, визажистар, массаж эшләүселәр, барберҙар үҙҙәренең оҫталығын күрһәтә һәм серҙәре менән бүлешә. Оҫталыҡ дәрестәре, конференциялар, тренингтар, дизайнерҙар ижад иткән әйберҙәрҙе күрһәтеү мода шоуы һ.б. уҙғарыла. Конкурс арҡаһында ҡатнашыусыларҙың клиенттары, шул иҫәптән илдең башҡа төбәктәренән дә, арта.

✓ **Быйыл баш ҡалала барлығы 31 һырғалаҡ эшләнәсәк. Уларҙың дөйөм майҙаны 106 мең квадрат метр тәшкил итә.** Бынан тыш, 90 хоккей ҡумтаһы эшләйәсәк, уларҙың 9-ы - ҡышҡы футбол өсөн тәғәйенләнә. Хоккей ҡумталарының дөйөм майҙаны 76 мең квадрат метр. Майҙансыҡтар барыһы ла яҡтыртыла, тимәк, көндөҙ генә түгел, кисен дә һырғалаҡта шыуырға йәки хоккей уйнарға була. Әле һауа торошо ыңғай торғанда ҡала хеҙмәттәре һәм объекттар милекселәре ҡумталарға һыу һиптерә башлаған. Боҙ тигеҙ туңһын өсөн һыу бер нисә тапҡыр һибеләсәк. Майҙансыҡтар әҙер булғас, ойоштороусылар сисенеү-кейенеү урындарын йыһазландырыуҙы, прокатҡа коньки биреүҙе, туҡланыу урындарын булдырасаҡ, яңы йыл байрамы кәйефен тәьмин итәсәк, күңел асыу программаһын әҙерләйәсәк.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Тамаҡ ауыртһа

❖ 1 стакан ҡайнатылған йылы һыуға яртышар балғалаҡ сода һәм тоҙ ҡушырға, бер нисә тамсы йод тамыҙырға. Ошо иретмә менән тамаҡты сайҡарға кәрәк.

❖ Баҙам биҙҙәре шешкәндә һәм йүткергәндә тамаҡты календула сәскәһе һәм шифалы шалфей япрағы төнәтмәһе менән сайҡатыу файҙалы. Шалфей япраҡтары ул сәскә атҡан осорҙа һабаҡтарының остары менән бергә йыйылған булһа, яҡшыраҡ. Төнәтмәне әҙерләү өсөн 4 балғалаҡ шалфейға 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 30 минут төнәтергә һәм һөҙөргә.

❖ Ларингит булғанда 3-әр өлөш шалфей япрағы һәм шифалы ромашка сәскәһе, 4 өлөш йәбешкәк (репешок) үләнен бергә ҡушырға. Ошо әҙерләмәнең 1 балғалағына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, ярты сәғәт төнәтергә, һөҙөргә һәм тамаҡты сайҡарға.

❖ Ангинанан һуған яҡшы ярҙам итә. Кемдер уны тота ла ашай, кемдер һуған башын ит турағыстан үткәреп, марля ярҙамында һутын һығып алып, шуны көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡ эсә.

❖ Ҡабығынан таҙартылған 2-3 киҫәк лимонды тамаҡ төбөнә яҡыныраҡ итеп һалып, йоторҙан алда күпмелер ваҡыт һурып йөрөргә кәңәш ителә. Был рәүешле хәл яҡшырғанға тиклем сәғәт һайын дауаланырға. Шулай уҡ 30 процентлы лимон кислотаһы менән тамаҡты сайҡатыу ҙа файҙалы. Әммә был лимонлы ысулдар ауырыу башланып ҡына торған саҡта ярҙам итә, оҙайлы ангина осрағында һөҙөмтәле булыуы икеле.

### Йүтәл

❖ Ҡаты йүтәлләгән осраҡта торма ярҙам итә. Уны йоҡа ғына киҫәктәргә телеп, өҫтөнә йәлләмәйсә шәкәр ҡомо һибергә. Ярты сәғәттән һуты бүленеп сыға. Шуны сәғәт һайын 1-әр ҡалаҡ эсергә.

❖ Ҡара торманы ҡырғыстан үткәреп, марля ярҙамында һутын һығып алырға һәм шуға 400 грамм шыйыҡ бал ҡушырға. Ашарҙан һәм йоҡларҙан алда 2-шәр ҡалаҡ эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ БИҘӘҮЕСТӘРЕ

## Тағыу традицияһы

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының түшкә тағып йөрөгән биҙәүестәре бөгөн башлыса байрам кейеменең бер элементы булараҡ ҡабул ителә. Шуға күрә күпселек осраҡта уларҙы байрамдарҙа, мәжлестәрҙә генә күрергә мөмкин. Был - хәҙерге көн традицияһы. Үткән быуаттар тураһында һүҙ алып барһаҡ, ул замандарҙа икенсе күренеш: биҙәнеү әйбере ҡатын-ҡыҙҙарҙың көндәлек тормошонда ла мөһим урынды алып торған. Мәҫәлән, 1770 йылда башҡорттар араһында булып киткән академик Петр Паллас башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарына ни тиклем ҡыйын булһа ла, биҙәүестәрен көн дауамында түштәренә тағып йөрөүен һыҙыҡ өҫтөнә ала. Башҡорт халыҡ кейемдәрен өйрәнгән этнограф С.Н. Шитова ла экспедиция ваҡытында шундай мәғлүмәттәр йыя. 1971 йылда Йылайыр районында булғанда бер оло ҡатын бейә һауырға селтәр һәм башҡа биҙәүестәрен мотлаҡ тағып сығыуҙары тураһында һөйләй. Шулай уҡ Әбйәлил, Баймаҡ райондарында ла мал ҡарағанда, бесән әҙерләгәндә, иген сәскәндә һәм урғанда биҙәүестәр тағылған. Ошо мәғлүмәттәрҙе иҫәпкә алғанда, түбәндәге фотоның тарихи нигеҙе бар тип әйтергә мөмкин. Күренеүенсә, бесән ваҡытында ҡатын-ҡыҙ түшенә селтәр тағып алған.



Көн дауамында тағып йөрөүҙең сере халыҡтың шул замандарҙа тормошто нисек ҡабул итеүе менән бәйле. Башҡорт халҡының боронғо ышаныуҙары буйынса, бөтә нәмәнең дә йәне бар. Сир-зәхмәттәр ҙә йәнле һәм бер төрөн икенсеһенән айырып торған һыҙаттары бар тип уйлағандар. Мәҫәлән, берәүҙәрен төҫө (аҡ бүһер), икенселәрен ҡиәфәте буйынса ҡылыҡһырлаған. Шуға күрә лә кешегә сарпыу ҡағылырға (ен ҡағылғандан килгән ауырыу), күҙ тейергә мөмкин. Күҙ тейгән йә күҙеккән осраҡта кеше ауырый, хатта үлә. Шуғалыр ҙа башҡорттарҙа: "Күҙ кешене ҡәбергә, малды ҡаҙанға керетер", - тигән әйтем бар. Күҙ тейҙермәҫ өсөн күҙ уғына ҡәртә ҡуялар. Һаҡланыуҙың бер мөһим ысулы булып биҙәүестәр тора, сөнки күҙҙәге уҡтар шул әйберҙәргә ҡаҙалып, кәсөн юғалта, тип иҫәпләгәндәр. Шуға бәйле мәғлүмәтте "Башҡорт халыҡ ижады"ның йолаларға арналған томында осратабыҙ: "Элек бер кешенең күҙе бик зәһәр булған. Берәүгә бер ҡараһа - көл итә лә ҡуя, ти. Берәү әйтә: "Тукта, ҡылайым әле ҡылыҡты". Ҡыубаш тотоп китә. Теге үткер күҙ бына бер ҡарай - алдыра алмай, ә йәнәшәлә барғанды көл итә. Шуға кәртә-ҡура тирәһенә, умарта эсенә ҡыу йылҡы башын элгәләр. Ҡортбаш ҡыу йылҡы башына оҡшаш. Шуға ла уны бишмәткә баҫалар. Ул ҡыҙ балаларҙы күҙегеүҙән һаҡлай". Күреүебеҙсә, был миҫалда кейемдәргә ҡортбаш тегеү ғәҙәтенең тамырҙары тураһында ла һүҙ бара.

**Азат ҒАРИПОВ,**
**этнограф.**
**"Башҡорт биҙәнеү әйберҙәре" китабынан.**

КӨНАУАЗ

# ТЫЙЫЛА ТОРҒАН...

## сир рәүешле боҙоҡлоҡтар

**(Башы 3-сө биттә).**

Әлбиттә, былдай тәрбиә иң элгәре ғаиләлә башҡарыла. Бала тәрбиәләүҙә атай кешенен дә, әсәнең дә тик уларға ғына - ир затына һәм ҡатын кешегә тәғәйен бурыстары бар, һәм уларҙың мөмкинлектәре лә бер үк түгел. Юҡҡамы ни беҙҙең башҡортта шундай тапҡыр һүҙ бар: "Атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән".

Шулай ҙа тағы бер нәмәне онотороға ярамаҫ ине. Кешелек донъяһында хатта ғалим-биологтарға ла сәбәптәре билдәһеҙ ҡала биргән бер күренеш бар, уны кеше үсешендәге биологик тайпылыш, тип нарыҡларға булыр ине. Үҙегеҙ уйлап ҡарағыҙ: енси өлгөрөү башланғанға тиклем малай һәм ҡыҙҙар араһында тик балаларға ғына хас, енси эмоциялар һис бер ҡатнашмаған мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килә. Ваҡыты еткәс, малайҙарҙың ҡыҙҙарға, ҡыҙҙарҙың малайҙарға ҡарата, ғәмәлдә, ҡапма-ҡаршы енси зат менән бәйле рәүештә ҡыҙыҡһыныуы арта бара, үсмер күңелендә енес менән бәйле хис-тойғолар ярала. Был - мәңгелек тәбиғәт ҡануны, шунһыҙ беҙ, кешеләр, мөхәббәт тигән оло хис феноменын да, ҡәҙимге ғаилә тормошон да белмәҫ-кисермәҫ инек. Тик шуныһы ла билдәле: кешелек, бәлки, үҙ тарихының башынан бирлелер, бер үк енесле әҙәми заттар араһында енси мөнәсәбәттәр барлыҡҡа килеүенә лә шаһит.

Бына боронғо йәһүдтәрҙең Тәүрат ("Библия") китабының "Тормош китабы" тип аталған бүлегендә ул заман кешеләренең һуңынан содомия тип атала башлаған гонаһы хаҡында бәйән ителә. Бынан 2 000 йылдан әүәлерәк Үле диңгеҙ буйҙарында, Иордан йылғаһы үҙәнендә Содом һәм Гоморра тигән ҡалалар булған икән. Ундағы халыҡ араһында зина ҡылыу ғәҙәти хәлгә әйләнә, һәр төрлө аҙғынлыҡ сәскә ата, хәҙерге заманда гомосексуализм тип аталған боҙоҡлоҡ һис бер тыйылмай. Ошо боронғо яҙмаларҙағы мәғлүмәткә ярашлы, Ибраһим бәйғәмберҙең энеһе Лут та Содомда йәшәгән була. Сиктән ашҡан гонаһтары өсөн Аллаһы Тәғәлә Содом һәм Гоморра ҡалаларын ер йөҙөнән юҡ итергә була. Шулай итеп, аҙғын халыҡ юҡ ителә...

Йәнә бер миҫал. Беҙҙең эраға ҡәҙәре һәм унан аҙағыраҡ Рим империяһы, ошо дәүерҙең иң ҡеүәтле дәүләте булараҡ, Европа һәм Азия илдәрендә билдәлелек таба. Башҡа ҡәүемдәрҙе баҫып алып, уларҙы талап, ҡолдар хеҙмәтен файҙаланып йәшәгән империя аҡһөйәктәре лә һәр төрлө аҙғынлыҡтың сигенән сыға. Империяла һуңынан бар донъяға быҒаса күрелмәгән фажиғәгә тарыған Помпеи ҡалаһы ла була. Был ҡалала ла, барса империялағы кеүек, эскелек, зина ҡылыу, фәхишәлек менән бер рәттән, гомосексуализм да ғәҙәти бер хәлгә әүерелә. Б.э. тиклем 76 йылда ҡала эргәһендәге Везувий вулканы атылып, унан сыҡҡан көл һәм лава ҡала халҡын тулыһынса юҡ итә. Шуныһы лә ғибрәтле: күп метрлы көл ҡатламы аҫтында һәләк булған помпеялыларҙың таш булып ҡатып ҡалған һындары Аллаһының мәңгелек бер киҫәтеүелəй, беҙҙең заманға килеп еткән...

Нисек кенә булмаһын, гомосексуализм, шулай уҡ башҡа бер енси тыйнаҡһыҙлыҡтар, тәбиғәт менән бер ҡатар йәмғиәт ҡанундарына ҡаршы килә. Былдай күренештәрҙе йәмғиәти сир, тип атау фарыз. Уны тыймау, пропагандалау, аҡлау, дәүләт ҡанундары менән яҡлау - халыҡтар киләсәгенә иҫ киткес зыян килтереүгә, йәш быуындарҙың аңына һәм үҙаңына үтә зарарлы, ағыулы орлоҡ сәсеп, яңылыш юлға баҫтырыуға барабар. Ә бит кеше ғүмеренә хәүеф янаған сирҙәргә ҡаршы көрәш алып барыу, сирлеләрҙе дауалау - борондан килгән ҡанун икәнене һис бер шик юҡтыр. Беҙ бит алкоголизм, наркоманлыҡты ла шул уҡ тыйылған йәмғиәти сирҙәр иҫәбенә индерәбеҙ.

Мәҡәләбеҙҙе йомғаҡлап, шуны ла әйтергә булыр ине. Ер йөҙөндә көн күргән барса кешеләр, бик тә боронғо замандарҙан бирле, бары тик хәҙергеһен, ҡәҙимге көнитмешен генә ҡайғыртып йәшәмәгән, киләсәгенә нигеҙ һалған - ғаилә ҡорған, йортҡура тәҙөгән, хәләл ризыҡын булдырған, балалар үҫтергән. Улар, боронғосараҡ әйткәндә, Аллаһы Тәғәләнең кешеләргә еткерелгән ҡанундарына тоғро ҡалырға тырышҡан: "Эй, Әҙәм балалары! Беҙ һеҙҙе ир һәм ҡатын рәүешле ярлттыҡ, ҡауышығыҙ, үрсегеҙ, ейәр хәләл ризығығыҙҙы тир түгеп табығыҙ!"

Иманыбыҙ камил, ошо мәңгелек ҡағиҙәне үтәүҙән башҡа кешелектең киләсәгеен күҙ алдына ла килтереп булмай.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ.**

ФӘҺЕМ

# ҺАЛАМ



Бер ваҡыт Аллаһы Тәғәләгә бер ҡатын килгән. Арҡаһындағы ауыр тоҡто саҡ-саҡ күтәреп тора икән үҙе.

- Арыныңмы, һылыу? - тип борсолоуын белдергән Аллаһ. - Тоғондо төшөрөп тор, бер аҙ ултырып ял ит.

- Рәхмәт, мин оҙаҡҡа түгел. Бер нәмә генә һорайым да кире йүгерәм. Мин юкта өйҙә бер-бер хәл булһа, ғүмерҙә үҙемде ғәфү итә алмам.

- Үҙеңә нимәне ғәфү итә алмаҫһың һуң? - тип ҡыҙыҡһынған Аллаһ.

- Балам менән берәй бәлә була ҡалһа... Әле лә һиңә "Баламды һаҡлай күр бер үк", тип һорарға килеп ултырыуым.

- Минең былай ҙа бар эшем шул бит инде. Әллә берәй тапҡыр шикләнергә сәбәп бирҙемме?

- Юҡ та ул... Тормошта бит төрлө ҡурҡыныс хәлдәр, кире йоғонтолар, насар күренештәр күп. Ә баламдың шундай ваҡыты - бөтәһен дә үҙе күреп, татып, тотоп ҡарағыһы килә. Ә мин бәлә-ҡазаға юлыҡмаһын, ауыртынмаһын-һыҙланмаһын, кеше яуызлығына тарымаһын, тип борсолам.

- Берҙе ауыҙы бешһә, икенсе тапҡыр өрөп ҡабырға яҡшы булыр ине. Ауыртыу нимә икәнен үҙ тәнендә тойоп ҡарарға тейеш бала, - тигән Хоҙай. - Ниңә уның үҙ тәжрибәһе булыуына ҡаршыһың?

- Юҡ, минең балам тик яҡшы нәмәләр генә күреп, бәхетле йәшәргә тейеш. Уны аңһыҙ һәләкәттәрҙән һаҡлау өсөн бына ошолай тоҡ менән һәр ваҡыт һалам йөрөтәм. Ул ҡоларға мөмкин ерҙә түшәй һалып ебәрәм.

- Үҙең һалам йөрөтәһең, тағы минән балаң алдына һалам түшәп тороуымды һорайһың. Улайһа, бына ҡара! - тигән дә Аллаһ тауҙай һалам хасил итеп, ергә һипкән.

Ҡатын улының нисек һалам араһында буталаныуын күргән. Үсмер һалам ҡулсаһын йырырға теләп, берсә үрһәләнә, берсә өмөтһөҙләккә бирелә, ти. Ахыр сиктә, ул кеҫәһенән шырпы сығарған да һаламға төрткән. Һалам гөлт итеп ҡалған, тирә-йүнде төтөн баҫҡан. "Улым! - тип үҙәк өҙгөс итеп ҡысҡырған әсә. - Көт, мин ярҙамға барам".

- Нимә, тағы ла һалам ташламаҡсы булаһыңмы? - тигән Аллаһ Тәғәлә. - Белеп ҡуй: ата-әсәләр һаламды күберәк түшәгән һайын, баланың унан ҡасыу теләге көслө була. Килеп сыҡмаһа, ул бына шулай ғүмерен әрәмгә "яндыра" башлай. Ул бит һыҙланыуҙың нимә икәнен белмәй... Һин арҡаңда һалам тоғо тип уйлайһың, ысынында, ул бит проблемалар тоғо. Унда һинең бөтә ҡурҡыуҙарың, хәүефтәрең, борсолоуҙарың ята. Шуларҙы күтәреп йөрөтөп, уны ҡабат-ҡабат энергияң менән көсәйтәһең... Шуға һинең арҡаң бөкөрәйгән, йөгөң ауырайғандан-ауырая...

- Шунан мин улым тураһында хәстәрләргә тейеш түгелме? Һинме шундай хәбәр һөйләйһең, Аллам?

- Теләгәнсә хәстәрлә балаңды. Тик борсолма, ҡурҡма, хәүефләнмә. Улары бит минең бурыс. Миңә лә эш ҡалдыр! Ҡамасаулама!..

*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.

Ошондайыраҡ кире ҡараштарҙы күҙ уңында тотоп, китабыбыҙҙың 1994 йылғы вариантында Арҡайым кеүек тораҡтарҙың планировкаһы буйынса Хорезм һәм Бактрияның ҡала-ҡәлғәләрен хәтерләтеүе хаҡындағы фекеребеҙҙе белдергән инек. Ул саҡта беҙ Афғанстандың төньяғындағы, Арҡайым кеүек үк, түңәрәк планировкалы Дашлы-3 тип аталған күренекле Бактрия ҡалаһын иҫкә алғайныҡ: цитадель терәк башнялары булған ике рәт стена менән уратып алынған, ә уның тирәләй тағы ла ике ҡәлғә стеналары төҙөлөп, улар барлыҡҡа килтергән арауыҡты тулыһынса торлаҡ һәм хужалыҡ ҡоролмалары биләгән.

Дашлы-3 - күренекле һәм ҡатмарлы ҡомартҡы-ҡала, ул тулыһынса саман кирбестән төҙөлгән була. Ҡаланың төп йәшәү ваҡыты б.э. тиклем II мең йыллыҡтың икенсе яртыһы - I мең йыллыҡ баштарына тура килә, әммә уның барлыҡҡа килгән осорона ҡараған иртә ҡатламдары бронза быуатынан ҡалған. Тимәк, бер нисә рәт стена менән уратып алынған, түңәрәк формаһында планлаштырылған ҡала-ҡәлғәләр Урта Азия территорияһында бронза эпохаһында барлыҡҡа килгән һәм иртә тимер быуатында үҫешә барған, быға Ҡуйҡырылған-ҡала исемле Хорезм ҡаласығын миҫалға алырға була. Көньяҡтың ошо яҡын аналогиялары Көньяҡ Уралда Арҡайым тибындағы ҡәлғәләрҙе төҙөү традицияһының, ихтимал, Урта Азия һәм Урта Көнсығыш (Афғанстан) аналогтарына бәйле булыуын күрһәтә, ә улар, Арҡайым кеүектәре менән сағыштырғанда, камилыраҡ, планировкаһы буйынса ла, төҙөлөш техникаһы яғынан да ҡатмарлыраҡ.

Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең Арҡайым кеүек торлаҡтар төҙөү традицияһын күршеләренән үҙләштермәүенә, улар мөхитенә Урта Азияның көньяҡ райондарынан күсеп килгән күп һанлы ҡәүем төркөмө тарафынан индерелеүенә төшөнөүе ауыр түгел, һәм ошо оригиналь ҡомартҡыларҙы ҡора алыу ҡаҙанышын уларҙыҡы тип иҫәпләргә була. Тикшеренеүсе, ошондай ҡәлғәләрҙең Көньяҡ Уралда барлыҡҡа килеүе сәбәптәрен асыҡлағанда, беҙҙең ҡарашҡа, уларҙың планировка үҙенсәлектәрен, төҙөлөш техникаһын иҫәпкә алырға тейеш, ә Урта Азия төбәктәрендә уларҙың туранан-тура аналогтары бар. Арҡайым тибындағы торлаҡтарҙың археологик материалдары составында урындағы мәҙәниәт һыҙаттарының өҫтөнлөклө булыуын еңел генә аңлатып була. Бында күсеп килгән ҡәүем, үҙҙәренә хас булмаған мөхиткә юлыҡҡанлыҡтан, уның йоғонтоһонда ҡәлғәләр төҙөгәндә урындағы материалдарҙы (ағас, таш, балсыҡ) ҡуллана башлай, күп һанлы ерле ҡәбиләләр ҡамауында уларҙың матди мәҙәниәтен ҡабул итергә мәжбүр була (тулыһынса йә иһә өлөшләтә).

Беҙ һынташты мәҙәниәтен ике мәҙәни традицияның үҙ-ара бәйлелегенең һәм йоғонтоһононң классик миҫалы, тип фараз итәбеҙ. Г.Б. Здановичтың һәм уның коллегаларының Арҡайым кеүек торлаҡ-ҡәлғәләрҙең берҙәм планға һәм ойоштороу башланғысына ярашлы башҡарылыуы хаҡындағы ҡарашы хаҡлы, ә был ошо заманда Көньяҡ Уралда ҡәбиләләр союзы рәүешендәге сәйәси берекмә булыуын күҙаллауға ерлек бирә, ул иң боронғо, археологик яҡтан аныҡ билдәләп була торған дәүләти берләшмә булараҡ барлыҡҡа килә һәм йәшәй.

Ошондай аңлатмаға ярашлы, беҙгә Г.Б. Зданович тикшеренеүҙәренең төп положениелары менән килешеү фарыз.

Арҡайым тибындағы ҡаласыҡтарҙы асыу һәм өйрәнеү айҡанлы ҡыҙыҡһыныу тыуҙырырлыҡ тағы ла бер фекер хаҡында яҙып үтәйек. Бронза эпохаһында Көньяҡ Уралда нығытылған ҡаласыҡ-ҡәлғәләрҙең барлыҡҡа килеүе хаҡында тәүләп XX быуаттың 60-сы йылдарында "Көньяҡ Уралдың боронғо тарихы очерктары" тигән китабының беренсе ҡулъяҙма вариантында К.В. Сальников белдергәйне. К.В. Сальниковтың ошо фекеренә түңәрәк формалы ҡаласыҡтарҙың береһендә бронза быуаты мәҙәниәтенә ҡараған керамика табылыуы сәбәп була. Көньяҡ Уралда бронза быуатында ҡаласыҡ-ҡәлғәләрҙең барлыҡҡа килеүе хаҡындағы ҡараш ул саҡтағы археология фәне логикаһына ҡаршы килә ине, һәм ҡулъяҙманы тикшергәндә СССР Фәндәр академияһы Башҡортостан филиалының Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының археология һәм этнография секторының барса хеҙмәткәрҙәре, шул иҫәптән ошо китап авторҙарының береһе, ошо фактты иғтибарға алды, шунан һуң К.В. Сальников ул заман өсөн мөмкин булмаҫлыҡ ошо положениены ҡулъяҙмаһының аҙаҡҡы вариантынан алып ташларға мәжбүр булды.

Арҡайым кеүек ҡомартҡыларҙы тәүләп асыусының күп кенә мөһим положениеларын коллегаларының тап ошолай ҡабул итмәүен хәҙерге ваҡытта ла күреп торабыҙ, быны һыҙыҡ өҫтөнә алмайынса ла булмай. Был фән өсөн ҡәҙимге күренеш.

Һуң бронза быуатында (б.э. тиклем XII-IX бб.) Көньяҡ Уралда андронов, абашев һәм бура мәҙәниәттәре ҡәбиләләре варисҭары йәшәүен дауам итә. Тикшеренеүселәр ошо заманға ҡараған межов, саргарин, курмантау кеүек эре ҡәбилә төркөмдәре булыуын билдәләй. Хужалыҡ балансында малсылыҡ биләгән өлөштөң арта барыуы ошо эпоханың мөһим үҙенсәлеге булып тора. Был хәрәкәтсән тормоштоң өҫтөнлөк ала башлауына килтерә. Дала зонаһында ғәмәлдә ярым ер торлаҡтар ташлап кителә һәм кешеләр ер өҫтөндә төҙөлгән бүрәнә өйҙәрҙә йәшәй башлай. Матди мәҙәниәттең башҡа төрҙәре лә билдәле бер үҙгәрештәр кисерә. Нисек кенә сәйер тойолмаһын, Көньяҡ Уралда Арҡайым тибындағы торлаҡтар артабан үҫешә алмай һәм юҡҡа сыға.



Был факт, бәлки, баҡыр мәғдәнен сығарыусы ерле рудниктарҙың әһәмиәте кәмей барыуы, ошоға сәбәп булған тимер металлургияһы үҫеше башланыу менән бәйлелер. Һәр хәлдә лә, археологик ҡомартҡыларҙа баҡыр-бронза әйберҙәр етештереүҙең ҡырҡа кәмеүе күҙәтелә; шулай уҡ таш эшкәртеү техникаһының дөйөм тарҡалышы күренә. Ретушь техникаһын файҙаланыу алымы менән етештерелгән уҡ башаҡтары, хәнйәрҙәр һәм башҡа предметтар урынына ышҡып шымартылып (шлифовкалап), бысып һәм тишеп яһалған таш балталар, ҙур сүкештәр киң таралыу ала. Балсыҡ көршәктәрҙә әүәлге замандарҙағы биҙәкле орнаменттар осрамай. Мәҙәниәттең һәм тормош ҡоролошоноң ошондай яңы һыҙаттары Евразияның киң далаларында тимер быуаты башында асыҡтан-асыҡ беленеп торған күсмә һәм ярым күсмә хужалыҡ итеүгә күсеү өсөн тейешле шарттар тыуҙыра.

Ошо бүлекте йомғаҡлағанда Арҡайым тибындағы ҡала-ҡәлғәләрҙе асыу һәм уларҙың дала Евразияһы үҙәгендә йәшәүсе халыҡтарҙың боронғо тарихындағы урынын һәм ролен интерпретациялау менән бәйле фәнгә яҡын дискуссия мәсьәләһенә ҡарата үҙ фекеребеҙҙе белдереп китеү кәрәкле, тип иҫәпләйбеҙ. Үрҙәрәк беҙ бөтөн донъя ғилми йәмәғәтселегенең ошо ҡомартҡыларҙы асыуҙы дала Евразияһының боронғо тарихын өйрәнеүгә индерелгән мөһим ҡаҙанышы сифатында баһалауын айырым билдәләп киткән инек. Тупланған материалдар бронза быуатында Көньяҡ Уралдың дала Евразияһының иң эре мәҙәни-иҡтисади үҙәктәренең береһенә әүерелеүен, бында ҡәлғәләр кеүек ғәҙәти булмаған ҡомартҡылар барлыҡҡа килеүен асыҡтан-асыҡ күрһәтеп тора. Тәбиғи, Арҡайым тибындағы ҡомартҡыларҙы асыу һәм өйрәнеү уҡыусыларҙың киң мөхитендә ҡыҙыҡһыныу уятты, ҡомартҡылар массовый туризм объекттарына әйләнде. Киң матбуғат саралары аша археология фәнен үҙ итеүселәр араһында алып барылған аңлатыу эше һәм туристарҙың Арҡайымға йөрөүе етди борсолоу тыуҙыра.

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ*

# ЯҢЫ ТӨР БӘШМӘК



**"Башҡортостан" милли паркында ғалимдар һирәк осрай торған бәшмәк тапҡан.**

Рәсәй биләмәһендә тәүге тапҡыр ерән сусҡа бәшмәге табылған (Paxillus cuprinus). Ғалимдар уны "Башҡортостан" милли паркында экспедиция ваҡытында тапҡан. В.Л. Комаров исемендәге ботаника институты хеҙмәткәрҙәре йәйгеһен республикаға экспедицияға килгән һәм уның буйынса отчет әҙерләгән. Беҙҙә бәшмәктең 63, шул иҫәптән Башҡортостан өсөн 23 яңы төрө асыҡланды.

Асыҡ сығанаҡтарҙағы мәғлүмәттәргә ярашлы, илебеҙҙә ерән сусҡа бәшмәгенең таралыуы хаҡында мәғлүмәт юҡ. Бәшмәктең был төрө Рәсәйҙең урта һыҙатында бер тапҡыр ҙа осрамаған икән. Сусҡа бәшмәктәренең барлыҡ төрҙәре кеүек үк, улар ҙа ағыулы.

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Немец автоматсыларының контратакаларын кире ҡағыуҙа 2-се эскадрон менән бергә уң яҡ ярға сыҡҡан миномет взводтары бик әүҙем ҡатнаша. Гв. кесе лейтенанты Сафа Хәсәновтың (Стәрлебаш районының Өмөтбай ауылынан) минометсылары, ҡыуаҡтар араһында ятҡан немец автоматсылары өҫтөнә мәргәндәрсә мина яуҙыра, дошмандың өс ут нөктәһен ҡыйрата. Белоруссияның Нивки ауылы өсөн барған алышта С.Х. Хәсәновтың минометсылары, үҙҙәрен уратып алған дошман бер нисә мәртәбә контратакаға күтәрелһә лә, уны сәғәт ярым буйына утҡа тотоп, кире ҡағып тора. Сафа Хәсәновҡа ла Советтар Союзы Геройы исеме бирелә. Һуғыштан иҫән-һау ҡайтып, тыуған районында 1946 йылдан 1969 йылға тиклем колхоз рәйесе, ауыл советы рәйесе вазифаларында эшләй.

2-се эскадрон яугирҙары, уң ярҙағы плацдармда бергә йыйналып, беҙҙең 4-се эскадрон яугирҙарына ярҙам итер өсөн атакаға күтәрелә. Таң атыуға 3-сө һәм 1-се эскадрондар, шулай уҡ полк командиры Таһир Күсимов та үҙенең штабы менән һис бер юғалтыуһыҙ Днепрҙың уң ярына сығып өлгөрә.

27 сентябрҙә иртә менән беҙҙең дивизияның 60-сы гв. атлы полкы ла йылға аша сыға башлай, уның ике эскадроны понтон кәмәләрҙе файҙалана. Болоттар таралыу менән немец самолеттары йылға аша сығыусы яугирҙарға һөжүм итә, әммә уларҙы дивизияның зенит орудиелары көслө ут менән ҡаршылай. Дивизия һәм корпус артиллерияһы дошман пушкалары һәм минометтары урынлашҡан позицияларға бер туҡтауһыҙ снарядтар яуҙыра, ергә төшөп ярылған бомба һәм снаряд шартлауҙарынан Днепрҙың ике яҡ яры өҫтөндә көслө канонада тауышы яңғырап тора, күк йөҙөн ҡара болоттай туҙан һәм төтөн ҡаплай.

Дошман самолеттарының тәүге һөжүме уңышһыҙ тамамлана, унан беҙҙең частар әллә ни зыян күрмәй. 16-сы гв. атлы һәм 77-се гв. уҡсы дивизиялары Днепр аша сыҡҡанда уларҙы көндөҙөн һауанан совет истребителдәре ҡурсалай, немец самолеттарын ҡыуып ебәреп тора. Улар беҙҙең самолеттарыбыҙ булмағанда ғына яугирҙарыбыҙ биләгән позицияларҙы бомбаға тота ала. Тик киске эңер төшөүгә, совет истребителдәре ялан аэродромдарына ҡайтып киткәс, дошман авиацияһы Днепр аша сығыуҙарын дауам иткән яугирҙарҙы бомбаға тота. Был юлы беҙҙең ғәскәр бер ни тиклем юғалтыуҙарға дусар була, ҡайһы бер һал һәм кәмәләр емертелә, әммә был ошо данлы йылға аша тиҙерәк сығырға ашҡыныусы яугирҙарҙы туҡтата алмай.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

# ЕТМЕШ ТӨРЛӨ ҺӨНӘР

**Оҫта ҡуллы, бар эшкә маһир ир-егеттәр тураһында бер һөйләм менән шулай тибеҙ: "Етмеш төрлө һөнәр эйәһе". Редакциябыҙҙың бөгөнгө ҡунағын да ошолай ҡылыҡһырларға була, шуға ла уның шәхесен ҡайһы яҡтан, ҡайһы һөнәре менән асырға, тип тә аптырарға тура килде. Ни тиһәң дә, ул Башҡортостандың атҡаҙанған ғына түгел, ә халыҡ артисы. Үҙе бейеүсе, үҙе төньяҡ амуры, үҙе мәргән уксы, үҙе… Хәйер, үҙе тураһында һөйләүҙе уның үҙенә - "Амантай" ижад үҙәге етәксеһе Рафаэль АМАНТАЕВҡа йөкмәтәйек.**

**Һеҙ республикаһының мәҙәниәт өлкәһендә генә түгел, ә башҡорт халҡының абруйлы шәхесе Ғабдулла Амантайҙың ейәне булараҡ та билдәлеһегеҙ. Олатайығыҙ тураһында ниндәй хәтирәләр ишетеп үҫтегеҙ?**

- Атай-әсәйем ул ваҡыттағы алдынғы ҡарашлы Мөхәмәт Исҡужин, Рәшит Солтангәрәев һәм башҡа башҡорт зыялылары кеүек үк, 20-се башҡорт мәктәбенә (хәҙер Ф. Мостафина исемендәге Башҡорт гимназияһы) нигеҙ һалыусылар сафында, һуңынан ата-әсәләр комитетында торғас, беҙҙе - мине һәм һеңлемде - ошо белем усағына уҡырға бирҙе. Һәм бында төп маҡсат булып Ғабдулла Амантайҙың - Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының беренсе директорының, биш йыл етәкселек итеү осоронда башҡорт тел ғилеме, зыялылары балалары уҡыны, шуға улар минең ниндәй нәҫелдән икәнде белә ине. Әммә мәктәптән һуң, Ф. Ғәскәров исемендәге ансамблдә бейегәндә, был турала, йәғни Ғабдулла Амантайҙың ейәне булыуым хаҡында бик асылып барманым, сөнки тамашасы һөйөүен үҙем, үҙемдең хеҙмәтем, ҡаҙаныштарым менән яулағым килде. Хатта был турала пенсияға сыҡҡансы белмәүселәр ҙә булғандыр әле...

**"Әсәнән күргән - тун бескән, атанан күргән - уҡ юнған", ти халыҡ мәҡәле. Һеҙгә атай-әсәйҙән ниндәй сифаттар күскән?**

- Атайым өйҙә бөтөн нәмәне үҙе эшләй ине. Уға ҡарап, мин дә үҙем тотоп, нимәлер эшләгем килә торғайны. Минең ынтылышымды күреп, ул 10 йәш тирәһендә еҙ табаҡҡа нишлай, ҡатын-ҡыҙ депрессияға бирелә. Минең алдымда артабан нимә менән шөғөлләнергә тигән һорау торманы; оҫталығымды арттырыу өсөн Өфөләге 159-сы һөнәрселек училищеһына ювелирҙар курсына уҡырға инеп, диплом алып сыҡтым.

Тәүҙә "Амантай" ижади оҫтаханаһын ойошторҙом, һуңынан киңерәк проекттар уйлап табып, уларҙы тормошҡа ашырып, ижади үҙәк тип атаныҡ. Киләһе йыл "Амантай" ижади үҙәген ойоштороуға ла 15 йыл була. Хәҙер арҡаҙаштарым - синыфташтарым рәссам-реставратор Азат Ҡужин, тарих фәндәре кандидаты Юлай Әбсәләмов менән проекттарыбыҙҙы грантҡа тәҡдим итеп, грантар яулайбыҙ һәм балалар өсөн ҡыҙыҡлы тарихи китаптар, төрлө плакаттар нәшер итәбеҙ.

**Иҫке йолаларҙан, ғөрөф-ғәҙәттәрҙән, тарихтан айырылмау яңы быуынға ниндәй файҙа килтерә?**

ылыҡтырҙы: беҙ бит башҡорттарҙың баш кейемен гелән оҙон төлкө ҡойроҡло итеп кенә күреп өйрәнгәнбеҙ. Ә бит уны Фәйзи Ғәскәров сәхнә образы итеп индереп ебәргәне барыбыҙға ла тарихтан билдәле. Әйткәндәй, башҡорт ир-егеттәре бер ваҡытта ла төлкө тиреһенән тегелгән бүрек тә киймәгән, уны ҡулланмаған да. Был хәйләкәр йәнлек тиреһен улар ҡатын-ҡыҙҙыҡы тип ҡараған. Башҡорттарҙа күн бүректәр генә түгел, малахайҙар, һарыҡ, бүре, бурһыҡ, ҡама тиреһенән тегелгән баш кейемдәре булған. Кантон начальниктары бейек конус формаһындағы ҡалпаҡтарҙа йөрөгән, конустың бейеклеге уларҙың статусын күрһәткән. Бынан сығып, ябай халыҡ эшләпә кеүек тирәсле кейеҙ ҡалпаҡтар кейгәндәр, тип фаразларға мөмкин.

2012 йылда "Төньяҡ амурҙары" составында "Любизар" - 1-се Башҡорт атлы полкы" хәрби-тарихи клубын Бородинола ҡатнашырға саҡырғас, мин тәүге тапҡыр ҡолаҡсын теккәйнем. Ул ваҡытта уҡ мин бер төрлөлөктән ҡасып, беҙҙең күп төрлө баш кейемебеҙҙе күрһәткем килгәйне. Һуңынан "Мәргән уксы" клубы ағзалары ла ошондай ҡолаҡсында сығыш яһай башланы. Әммә улар милли кейем кимәлендә түгел. Бына районларға сыҡһаң, башҡорт милли кейемендә йөрөгән ағинәйҙәрҙе күрһәң, күңелгә рәхәт булып китә. Баш кейемдәребеҙ ҙә шулай халыҡ араһына сығарылып, популярлаштырылырға тейеш.

**Икенсе яҡтан ҡараһаҡ, былай кейемдәрҙе көндәлек кейем итеп ҡуллана башлаһаҡ, мәҫәлән, лайыҡ булмаған кеше кейеп, кейемдең йәки баш кейеменең бәсен, статусын төшөрөргә лә мөмкин бит… Бәлки, статуслы кейемдәрҙе берәм бөртөкләп эшләп, бүләк итергә, ә статусты күрһәтмәгәндәрен көндәлектә ҡулланырғалыр?**

- Башҡорт кейемдәренең бит хәрбиҙәрҙеке кеүек айырма ранғтары бар. Мәҫәлән, ҡалпаҡта галун (лампас) алтын йәки көмөш булыуы мөмкин. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының янсығы һәр саҡ үҙе менән, тиған кеүек, башҡорт ир-атының абруйы ла уның кейгән баш кейеменән алыҫтан күренеп торорға тейеш булған. Әгәр металлы галун тегелһә, тимәк, был персонаж ниндәйҙер ҙур хәрби түрә (командир). Ябай халыҡтың кейемен уҡа менән биҙәрлек мөмкинлеге булмаған.

Дөрөҫөн әйткәндә, кейемдәрҙе реконструкциялағанда тоттоң да тектең түгел. Тәүҙә уны ентекләп өйрәнәһең, тарихи фактар менән таныша фольклористикаһы, әҙәбиәт теорияһы һәм мәҙәниәт өсөн бик ҙур эштәр башҡарып өлгөргән шәхестең ейәндәренең башҡорт телен, әҙәбиәтен, тарихын, мәҙәниәтен белергә тейешлеге торғандыр, моғайын. Бынан тыш, ҡартатай Ленинградта лингвистика философияһы институтында уҡый, ете тел белә һәм уны Көнсығыштың ғәрәп илдәренә илсе итеп әҙерләйҙәр. Әммә Башҡортостанда яңы институт асылғас, ашығыс рәүештә саҡыртып алалар һәм директор итеп ҡуялар, ул хатта аспирантура тамамлап та өлгөрмәй, һуңынан ситтән тороп тамамлап ҡуя.

Икенсе яҡтан, атайым үҙе лә башҡорт телен өйрәнеп ҡала алмай, сөнки ҡартатай ҡулға алынғас, атайым менән уның һеңлеһе Роленаны айырып, төрлө балалар йортона тапшыралар. Атайыма ул ваҡытта - 10, һеңлеһенә 4 кенә йәш була. "Халыҡ дошманы" балаһы ярлығы атайым артынан һәр саҡ эйәреп йөрөй, ул һәр ерҙә ҡағынды була, мәктәптә иң артҡы партаға ултырталар, хатта ваҡыты-ваҡыты ашханала аш етмәй ҡала. Хрущев заманына тиклем шулай дауам итә. Атайым ул мәлдәрҙе яҡшы хәтерләй ине, әммә бик асылып һөйләп барманы, бәлки, совет власына үпкәһе лә ҡалғандыр.

Һуңынан атайымды Нальчиктағы бер туғаныбыҙ табып, үҙенә алып ҡайта. Ролена һеңлеһе балиғ булғанға тиклем балалар йортонда үҫә һәм тәрбиәләнә. Ағаһы менән улар 17 йылдан һуң ғына осраша.

Әлбиттә, беҙҙең 20-се ҡала башҡорт мәктәбендә башҡорт сек итеп һүрәт күсерергә, сүкеп биҙәктәр эшләргә, ниндәй фон һайларға өйрәтте. Шунан алып мин ғүмер буйы ошо ижад менән шөғөлләнәм. Мәктәптә уҡығанда кемдеңдер тыуған көнөнә бирергә булһа, ата-әсәйҙән аҡса һорамайым, үҙем эшләгән бүләк алып бара торғайным.

Әрме хеҙмәтендә мин Волга буйы хәрби округының йыр һәм бейеү ансамблендә бейеүсе булдым. Ул саҡта ла минең был һәләтемде беләләр һәм стендтар эшләргә ҡушалар, башҡа биҙәү эштәренә йәлеп итәләр ине. Һуңынан, үҙебеҙҙең ансамблдә бейегәндә Риф Ғәбитов минә "Еҙ уксә" бейеүе өсөн тибенге (шпора) эшләргә ҡушты. Үксәләрҙе бер-беренә бәреп бейегән ваҡытта улар тауыш сығарырға тейеш булды. Тибенге эшләгәс, ул "4 тарханға бай ҡәмәрҙәр - билдектәр эшләргә кәрәк", тине. Эшләнем һәм бейеүселәр 30 йыл буйы минең ҡәмәрҙәрҙе тағып, сәхнәгә сыкты. Башҡа бейеүҙәр өсөн дә нимәлер эшләргә тура килде. Ансамбль ҡыҙҙары ҡатын-ҡыҙ биҙәүестәре - балдаҡтар, алҡалар эшләүемде һорай башланы. Улар өсөн дә эшләнем.

**Тимәк, "Амантай" оҫтаханаһы, һуңынан ижад үҙәге юҡтан ғына барлыҡҡа килмәгән...**

- Бейеүселәрҙең сәхнә ғүмере ҡыҫҡа - 20 йыл дауамында софиттар нурына ҡойоноп, тамашасының һөйөүенә, алҡыштарына күмелеп йәшәйһең дә, 40 йәштә пенсияға сыҡҡас, япа-яңғыҙ ҡалаһың. Икенсе һөнәрең юҡ. Ошо осорҙо күптәр ауыр кисерә, ир-ат эсә ба-

**Башта сәхнә әйберҙәренә элементтар эшләгәнһегеҙ, һуңынан тарихи реконструкция менән шөғөлләнә башлағанһығыҙ. Шуларҙың ҡайһыһы күңелегеҙгә нығыраҡ яҡын һәм нығыраҡ ҡәнәғәтлек килтерә?**

- Әлбиттә, бынан 200-300 йыл элек беҙҙең атай-олатайҙар кейеп йөрөгән кейемдәрҙең элементтарын тергеҙеп эшләнгән тарихи реконструкция мине бик нык рухландыра. Хәҙер минә ниндәйҙер коллектив өсөн сәхнә кейеменә, билбауҙарға заказ бирһәләр ҙә, мин уларға тарихи мотивтарҙы, тарихи элементтарҙы өҫтәп ебәрергә тырышам. Үҙем сәхнә кешеһе булғас, уларға нимә ярай, нимә ярамай икәнен дә яҡшы беләм, мәҫәлән, төрлө элементтар бейеүгә ҡамасауламаҫҡа, еңел сиселергә тейеш.

**Һеҙ быйыл "Тамға" конкурсында кантон начальнигы кейемен реставрациялап, Гран-при яуланығыҙ...**

- Был конкурста икенсе тапҡыр ҡатнашам. Беренсеһендә, атрибутика буйынса махсуслашҡас, тарихи әйәр, сбруй, йүгән, ҡалҡан, һаҙаҡ, ҡалъян, ҡамсылар менән барҙым һәм икенсе урынға лайыҡ булдым. Былтыр, операция үткәреп, ҡатнаша алманым һәм өсөнсө конкурсҡа маҡсатлы әҙерләндем. Конкурс шарттарының береһе - тарихи дөрөҫлөк, документаль раҫлау тейеш булғас, кантон начальнигы, зауряд йөҙ башы Фәхретдин Өмөтбаевтың фотоһы буйынса уның кейемен реконструкцияларға булдым. Тағы был фото мине нимәһе менән



Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитетында булған һөйләшеүҙә ошо ҡалпаҡты көндәлек итеп заманса лаштырыу мәсьәләһе лә күтәрелде. Ҡырғыҙҙар бит үҙҙәренең кейеҙ баш кейемен замансалаштырып, биҙәп, һәр сараға кейеп йөрөй. Хәҙер беҙ ҙә ҡайһы бер башҡорттарҙың малахайҙарҙа, түбәтәйҙәрҙә йөрөгәнен күрәбеҙ.

һын. Баҡтиһәң, кантон начальниктарының, юғары хәрби составтың кейемендәге уҡалар киң булған, түбән составтыҡы - тар. Шулай уҡ ҡылыс бәлдергәнө (темляк, ҡулға кейә торған элмәк) осондағы суҡ та көмөш булған. Кейемде ни тиклем ентекләберәк өйрәнәһең, шул тиклем уның эйәһенең яҙмышы ҡыҙыҡһынаҡ.

**Һеҙҙең шөғөлдәрегеҙ тиекме, мауығыуымы, әллә йәгәү рәүешеме - шул тиклем күп. Тағы бер мауығыуығыҙ - ул төньяҡ амуры. Шул хаҡта ла һөйләп китегеҙ әле.**

- Был "сирҙәрҙең" барыһының да диагнозы бер - реконструкция. Шул уҡ "Төньяҡ амурҙары" составындағы "Башҡортостан Республикаһының "Любизар" - 1-се башҡорт атлы полкы" хәрби-тари-

***✓ Уларҙың рухы беҙҙең эшләгән эштәргә, беҙ уларҙың фамилияһын дауам иткәнгә ҡыуанһын. Ҡартатайҙың исемен баш ҡала урамдарының береһенә биреүҙе юлланым, "Амантай" ижад үҙәге лә уның хөрмәтенә атала.***

# ЭЙӘҺЕ

хи клубы төбәк йәмғиәт ойошмаһының маҡсаты - ул тарихты тергеҙеү. Был хәрәкәт бөтөн донъяла киң билдәле. Һәр ерҙә үҙҙәренең тарихын, алыштарын реконструкциялайҙар. Беҙ 2013 йылда Лейпцигта үткән "Халыҡтар алышы" Халыҡ-ара хәрби-тарихи фестивалдә, ошо ваҡиғаның 200 йыллығында ҡатнаштыҡ. Унда тотош донъянан реконструкторҙар килгәйне. Уларҙың кейемдәре 1000 евро тора, сөнки был темаға бик етди ҡарайҙар, үҙҙәре текмәй, оҫталарға заказ бирәләр. Мәҫәлән, гусар кейемендәге ҡарттар килде эргәбеҙгә, уларҙың ҡылысы мамыҡ кеүек енел, һығылмалы, хатта тотҡаһына тиклем бөгөп тә була. Хаҡын һорағайныҡ, баһаһы юҡ, тинеләр. Баҡтиһән, ул тарихи ҡылыс һәм уға 200 йыл икән.

"Төньяҡ амурҙары" ойошторолоу менән Бородино реконструкцияһына командирыбыҙ Илдар Шәйәхмәтов барҙы. Әлбиттә, ул ваҡытта реконструкцияланған кейемдәребеҙ юҡ, филармониянан сәхнә кейемен алып торғандар. Һәм беләһегеҙме - уларҙы сарала ҡатнаштырырға теләмәгәндәр, әммә бары тик башҡорт булғандары өсөн генә йәйәүле ғәскәр араһында барырға рөхсәт иткәндәр. Саранан һуң: "Гравюралар, тарихи сығанаҡтар буйынса шул осор кейемдәрен өйрәнегеҙ", - тип ҡайтарғандар.

Ватан һуғышында бит яугирҙәр төүҙә көндәлек кейемдә йөрөгән. Улар яуҙарҙа туҙғас ҡына Багратион үҙ аҡсаһына тотош бер полкка дон казактары кейеме өлгөһөндә зәңгәр мундирҙар һәм ҡыҙыл лампаслы салбарҙар тектерә. 1812-1814 йылдарҙа йәмғеһе 5 башҡорт атлы полкы ошондай мундирлы кейемдәргә кейендерелә. Тағы ла 15 полкта командирҙарға, сотниктарға үҙаллы кейенергә тәҡдим итемә, ә ябай яугирҙарға үҙҙәренең милли кейемдәрендә йөрөргә рөхсәт бирелә.

Шулай уҡ ойошма 112-се Башҡорт атлы дивизияһы тураһында халыҡҡа күберәк мәғлүмәт таратыу, генерал Шайморатовты данлау менән дә шөғөлләнә. Уның һуңғы алышта ҡатнашҡан Тербун рубежы реконструкцияһында ла ҡатнаштыҡ. Әле бына инициатива менән сығып, Совет майҙанында Шайморатовтың яңы асылған һәйкәленә дивизия яугирҙары кейемендә ылыҫлы ағастан яһап, һалдат гирляндаһын һалдыҡ. Был сараны ла беҙ көтөп алдыҡ, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы байрағының макетын алып сыҡтыҡ.

Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы менән Пермь крайында ойошторолған 20-се кавдивизияға арналған хәтер сараһында ҡатнаштым, унда ла кантон начальнигы костюмында булдым.

Шулай уҡ "Төньяҡ амурҙары" идеяһы менән беҙҙең арҡаҙашыбыҙ Юлай Ғәлиуллин "Мәргән уксы" хәрәкәтен башлап ебәрҙе. Ул нимәһе менән яҡшы: ярыштарҙа мотлаҡ милли кейемдәрҙә ҡатнашырға кәрәк. Шундай шарт булғас, олоһо ла, кесеһе лә милли кейем тарихын өйрәнә, уларҙы тегә башланы. Тәүге осорҙа Юлай мине саҡырып, оҫталыҡ дәрестәре, асыҡ дәрестәр ойоштора инек. Уларҙа үҙебеҙ реконструкциялаған кейемдәр тарихын һөйләйбеҙ, атрибутика менән таныштырабыҙ, кәрәкле һылтанмалар бирәбеҙ. Бөгөн мәргән уксылар хәрәкәте киң ҡолас алды, хәҙер хатта һыбай килеш уҡ атыу буйынса ла ярыштар үткәрелә.

**Яңыраҡ шундай фекер ишетергә тура килде: башҡорт телендә баҙар механизмы эшләмәй, йәғни башҡорт телен популярлаштырыу менән шөғөлләнеп, байып булмай. Ә бына милли кейем, төрлө тарихи ваҡиғаларҙы реконструкциялау өсөн баҙар механизмы эшләйме?**

- Мин әлеге ваҡытта шуның менән генә аҡса эшләйем. Кем үҙе көн әйберҙәр, билбауҙар, портупеялар, ҡалъян, һаҙаҡ эшләй алмай, беҙгә мөрәжәғәт итә. Шөкөр, гаджеттар, интернет бар. Ижад үҙәге тап тарихи кейемдә һәм тарихи атрибутиканы популярлаштырыу, семинарҙар, лекциялар, күргәҙмәләр ойоштороу маҡсатында булдырылғайны ла инде. Беҙ һәр саранан һуң фотоларҙан, атрибутиканан күргәҙмәләр эшләйбеҙ.

**Әгәр ҙә бейеүсе булмаһағыҙ һәм ошо реконструкция менән шөғөлләнмәһәгеҙ, ниндәй һөнәр һайлар инегеҙ?**

- Бала саҡтан клоун булырға теләнем. Моғайын, артислыҡ ылыҡтырғандыр. Клоундар бит кешене көлдөрөп кенә йөрөмәй, улар жонглер ҙа, ниндәйҙер кульбиттар ҙа яһай белергә тейеш. Ә мин тиктормаҫ малай булдым. Шулай ҙа атаәсәйем мине Пионерҙар йортона бейеү түңәрәгенә бирҙе.

Тағы археолог булырға теләгем ҙур ине. Тарих һәм ҡаҙыныуҙар ныҡ оҡшай торғайны. Әсәйем, Роза Ғабдрахман ҡыҙы, йәш сағында походтарға йөрөнө, төрлө таштар алып ҡайтып, ҡайҙа, нисек тапҡандарын һөйләр ине. Ул бит өҫтәүенә Бөтә Рәсәй тарих һәм мәҙәниәт һәйкәлдәрен һаҡлау йәмғиәтенең Республика советы президиумы секретары, етәксеһе булды. Баш ҡала буйлап экскурсиялар үткәргәндә мине лә үҙе менән алды. Шулай итеп, тарихҡа, тыуған яҡҡа, мәҙәниәткә һөйөү уятты, өйөбеҙҙә тарихи китаптар күп булды.

**Тимәк, Өфөнө арҡырыға-буйға йөрөп сыҡҡанһығыҙ, тиергә була. Шулай ҙа күңелегеҙгә иң оҡшаған, һиллек тапҡан урынығыҙ ниндәй?**

- Элекке Крупская баҡсаһы (хәҙер Салауат Юлаев скверы) күңелемә яҡын. Салауат Юлаев майҙанында кеше һәр саҡ күп була, ә бында тыныс, матур, беседкала ултырып йәки аҫылмалы күперҙә тороп, йәнеңә тыныслыҡ табырға, тәбиғәт менән серләшергә, үҙеңде тыңларға мөмкин. Бында ысынлап та боронғолоҡ еҫе сыға, йәнең ял итә.

**Ҡабат олатайығыҙға урап ҡайтҡанда, атайығыҙ, бәлки, һөйләгәндер, һуңынан улар ошо репрессияланған шәхестәрҙең балалары, туғандары менән осрашып, аралашып йөрөгәнме? Ғүмүмән, бер-береһен белгәндәрме?**

- Беҙ һәр демонстрациянан һуң Ҡасим ағай Аҙнабаевтарға (хәҙерге "Башҡортостан" гәзитенең ул ваҡыттағы баш мөхәррире) бара торғайныҡ. Улар Дорофеев урамында иҫке йортта йәшәне. Ҡартатайым менән бергә репрессияға эләгә, әммә уны һөргөнгә ебәрәләр. Ул ваҡытта бәләкәй булғанмын һәм бер ни аңламағанмын, аҙаҡ атайымдан да төпсөнөп һорашмағанмын - шуға үкенәм. Ә әсәйем был яҡты донъянын иртә китте - 49 йәшендә яман шеш уны беҙҙән айырҙы. Ул Ҡасим ағайҙан һәр саҡ нимәләр һораша, һорауҙар бирә, уны иғтибар менән тыңлай торғайны. Әгәр иҫән булһа, бер нисә иҫтәлек китабы яҙыр ине, моғайын...

**Тормошта шундай билдәле кешенең, оло шәхестең фамилияһын йөрөтөүе ауырмы?**

- Атайым йомоҡ булды, уның балалар йорто һалған эҙе ғүмерлеккә ҡалды. Ауырлыҡты ул шулай йомолоп күтәргәндер. Беҙгә иң мөһиме - ҡартатайҙың, атайҙың исеменә тап төшөрмәҫкә кәрәк. Уларҙың рухы беҙҙең эшләгән эштәргә, беҙ уларҙың фамилияһын дауам иткәнгә ҡыуанһын. Һәр кем үҙенең мөмкинлегенән сығып данлай фамилияһын. Ғөмүмән алғанда, ҡартатайҙың исемен баш ҡала урамдарының береһенә биреүҙе юлланым, ул йәшәгән йортҡа иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйылған, "Амантай" ижад үҙәге лә уның хөрмәтенә атала.

**Булат Йосоповтың "Беренсе Республика" киноһын ҡарағанда ниндәй тойғолар кисерҙегеҙ? Олатайығыҙ менән осрашҡандай тойғо ҡалманымы?**

- Улар кино буйынса сценарий яҙғанда уҡ минән бик күп атрибуттарҙы, һаҡланған документтарҙы килеп алдылар. Аҙаҡ хатта сәхнә бейеүҙәрен ҡуйырға ла саҡырҙылар. Шуға күрә фильмды сыҡҡас ҡына күрҙем, тип әйтә алмайым.

Бер үкенесем ҡалды: кино төшөрөлгәндә Венгрияға ҡоролтайға саҡырҙылар, билеттар алынған. Фильмда театр гастролдә сығыш яһағанда сәхнәлә ҡатнашып, мин дә бейергә тейеш инем. Олатайымдың иҫтәлеген мәңгеләштереүгә тағы ла бәләкәй генә булһа ла өлөшөм инер ине...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рафаэль Альберт улы менән башҡорт милли кейеме, биҙәүестәр, тарих буйынса оҙонаҙаҡ һөйләшеп ултырырға була. Башҡорт яугиры төшөрөлгән бер гравюра буйынса ғына ла ул әллә күпме мәғлүмәт бирергә мөмкин. Бер ҡараһаң, ул тормошта барыһын да ваҡытында эшләп, барыһына ла өлгөргән кеүек, әммә уның күңелендә лә хыял йәшәй: беренсеһе, Амантаев фамилияһының өҙөлмәй дауам итеүе булһа, икенсеһе - "Амантай" ижад үҙәге оҫтаханаһын музей итеп йыһазландырыу. "Унда килеп, халыҡ минең раритет әйберҙәрем, экспонаттар, сит илдәрҙән алып ҡайтҡан төрлө артефакттар менән танышыр, балаларын таныштырыр ине. Улар нимәнелер тотоп, нимәнелер үҙҙәре эшләп ҡарап, ижад серҙәре нигеҙҙәрен алыр, ҡасандыр мине атайым еҙ табаҡҡа сүкеп матурлыҡ тыуҙырырға өйрәткән кеүек, күңелдәрендә оҫкон ҡабыҙыр ине", - ти әңгәмәсем. Булыр, Алла бойорһа, Амантай алдына алғанды үтәмәй ҡала торғандарҙан түгел.**



**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**



*Серҙәшем, фекерҙәшем булған олатайыма, рәхмәт һәм ихтирам менән*

Зөлфирә ҠАҘАҠБАЕВА

# МИНЕҢ ЯРАТҠАН БАШҠОРТОМ

(Повесть)

Үҙенең дә күҙенән йәше сөбөрләне Мирҙың: уның да үсе ҡайнай, таша! Әммә ярамай! Ярамай!

- Һеҙҙең дә, минең дә баш китер! Атырҙар! - ти Мир. Үҙе ысынды белеп һөйләйме, әллә ҡурҡыта ғынамы? Үҙен дә ҡурсыһандыр йәш сержант, иптәштәрен дә. Ныҡ шөрләне ул... Армия сафында ил һаҡларға китеп, төрмәгә йә дисбатҡа эләгеү - ул әҙәм күҙенә күренә алмаҫлыҡ оят. Үлемдән оят көслө, бындай хурлыҡҡа ҡалғансы, үлемең мең артыҡ Шуның өсөн уларҙың атайҙары фашистарға ҡаршы яуға сыҡтымы ла, шуның өсөн ғәзиз йәнен фиҙа ҡылдымы?..

Ныҡ ҡурҡты һалдаттар. Бер нисә көн яза көтөү менән үтте. Һәр шылт иткән тауышҡа, һәр командаға, һәр ҡапҡа асылған шығырҙауға, һәр телефон сыңына тертләп, көндәр үтте. Йоҡоһо йоҡо, ашы аш булманы уларҙың... Ныҡ ҡына һурылып, йонсоу төҫө керҙе. Әммә йәшен йәшнәмәне...

Ә шулай ҙа бер көн... Төшкө аштан һуң бирелгән ял ваҡытында ҡапыл ғына ҡатын-ҡыҙҙың ҡысҡырған тауышына Мир һикереп торҙо. Тауыш ситтән, парк яғынан килә ине:

- Der russische Soldat, der mich gerettet hat, antwortet! Russischer Soldat! Hab keine Angst! Ich m?chte dir danken! Danke! (Мине ҡотҡарған рус һалдаты, тауыш бир! Рус һалдаты! Мин һиңә рәхмәт белдерәм!)

Рәхмәт әйтергә теләйем, тиһә лә, шөр ебәрҙе Мир. Эҙләп килһә, көсләргә маташыусы һалдаттар менән уны таныһа, бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп! Ул ҡалтырана башланы, йәне алҡымына килеп тығылғандай булды, маңлайынан һалҡын, йәбешкәк тир бәреп сыҡты. Ҡыҙ ҡысҡыра-ҡысҡыра үтеп китте... Был хәл икенсе, өсөнсө көнгә лә ҡабатланғас, Мир ҡыҙҙы баяғы ҡойма тишеге янында ҡарауыллап ятты. Ҡыҙ ҡысҡырып, уның тәңгәленә еткәс кенә, тимерҙе шылдырып, башын тыҡты:

- Нимә кәрәк? Ни өсөн ҡысҡыраһың? Һин беҙҙе судҡа бирмәк булаһыңмы?

- Юҡ, юҡ! Бары атайым һеҙгә рәхмәт белдерергә теләй!

- Башҡаса килеп йөрөмә ! Онот тинем бит һиңә!

"Башҡаса килмә, онот нимә булғанын",- тиһә лә, ҡыҙ йәнә килде. Атаһы менән. Уларҙы плацҡа теҙеп ҡуйҙылар. Ҡәҙимге построение, тип иҫе китмәй генә, тыныс ҡына торған Мир саф алдынан өлкән йәштәге ир менән үтеп барыусы немец ҡыҙын күреп, сайҡалып китте. Икеһе лә иғтибарлап һалдаттарға текләй. Мир күҙ ҡырыйы менән генә теге ике иптәшенә төбәлде: уларҙың йөҙҙәре ап-аҡ булған, хәҙер иҫтән яҙып ҡоларҙарын көт тә тор. Ләкин ҡыҙ әллә уларҙы ысын танымады, әллә танымамышҡа һалышты, эргәләренән тыныс ҡына үтте һәм ҡараштары Мирҙың ҡараштары менән осрашты. Егет: "Өндәшмә! Белдермә!" -тигәнде аңлатып, күҙ ҡыҫты һәм баш сайҡаны. Ҡыҙ ҙа һиҙелер-һиҙелмәҫ кенә керпектәрен елпетте. Бер ни өндәшмәй, саф буйлап үттеләр һәм рота командиры менән бергә штабҡа инеп киттеләр.

"Вольно!" командаһын ишетеп, Мир еңел тын алды. "Үтте! Аллаға шөкөр!"- тип иркенләп торорға ла өлгөрмәне, штабтан йүгереп сыҡҡан дежурный ауыҙынан: "Сержант Зиннатуллин! Срочно к командиру роты!" - тигән фарман яңғыраны.

Мир йәнә үлеп терелгәндәй булды. Мамыҡҡа әйләнгән аяҡтары менән штабҡа йүнәлгәндә уның мейеһендә бары бер генә уй ҡайнаны: "Ни эшләргә? Әгәр теге һалдаттарҙың енәйәте билдәле булһа, нимә тип әйтергә? Ҡылынып өлгөрмәһә лә, көсләргә маташыу булды бит... Уны нисек инҡар итергә? Алйот һалдаттарҙың башын нисек имен алып ҡалырға? Ни эшләргә? Ни эшләргә?" Ер тишегә булһа, һис икеләнеүһеҙ инеп китеп, ҡотолор ине Зиннәтуллин был ваҡытта...

- Товарищ майор! Сержант Зиннатуллин по вашему приказанию прибыл!

- Вольно! - тине майор инеүсегә арыған ҡараш ташлап. - Не козыряй, сержант! Бына һине нисә көн эҙләп саҡ таптылар. - Ул ауыр кәүҙәле ҡарт менән ҡыҙға ымланы. -Ниндәй батырлыҡ эшләп ташланың, иптәш сержант? Йәле, һөйләп ебәр!

Мирҙың теле аңҡауына йәбешteme ни! Ул тыны быуылып, сайҡалып китте.

- Ярай, тулҡынланма! - тип йылмайҙы майор. - Һине подвиг яһаған тиҙәр бит әле, ә? Ҡыҙҙы енәйәтселәр тырнағынан йолоп алғанһың! Молодец! - Ул сержанттың ҡулын ҡаты итеп ҡыҫып, бер ара һелкеп торҙо! - Ғорурланабыҙ! Бойороҡ менән рәхмәт белдерербеҙ!

Бындайҙы көтмәгән Мир саҡ артына йығылып китмәне: ниндәй подвиг? Ниндәй рәхмәт? Көләләрме, мыҫҡыллайҙармы әллә юғиһә? "Карцерға ябырға, иптәштәрең менән военный трибунал алдына баҫасаҡһығыҙ!"- тиһәләр ҙә, бәлки, ул ҡәҙәре аптырамаҫ ине. Немец ҡарты ла килеп Мирҙың яурынынан ҡосаҡланы, үҙ телендә нимәлер һөйләне. Ҡыҙ ҙа ихлас йылмайҙы. Ә иҫе киткән Мир яҡшы белгән немец телен дә, уларҙың нимә тип әйткәнен дә аңламаны...

Шулай ҡотолдолар улар был ҙур бәләнән. Ике һалдаты ни кисергәндер, Мир уларға ҡарамаҫҡа, уларҙы күрмәҫкә тырышты, осраһалар йәнә туҡмап ташлауҙан ҡурҡты, ахырыһы. Ләкин үҙенә ғүмерлеккә һабаҡ алды: кешенең артабанғы тормошо, нисек булыры бер мәлдән генә тора! Күҙ асып йомған арала һин йә күккә менергә, йә ер аҫтына төшөргә мөмкинһең. Осорға йә дөмөгөргә... Һайлау үҙеңә һәм яныңдағы кешеләреңә бәйле. Тоғро дуҫтар, ышаныслы кешеләр менән генә юлдаш булырға кәрәк, шул саҡта былай оло һайлау алдына ҡалмаҫһың. Әллә ошо һабаҡ уға тормошона маяҡ булдымы, гелән дөрөҫлөктө сатнатып әйтерлек, аҡты ҡара тимәҫлек, яҡтылыҡты ҡараңғылыҡтан айырырлыҡ көс, ихтыяр барлыҡҡа килде уның холҡонда. Ғүмер буйы уның төп һыҙаты буласаҡ был холоҡ уны күп тапҡыр эргә-тирәһендәгеләргә дошман да яһаясаҡ, әммә үҙ-үҙенә тоғролоғон юғалтмай, кешеләрҙең күҙенә тура ҡарарлыҡ намыҫ менән көн итәсәк ул...

Ошонан һуң был немец ҡартын гарнизонда йыш ҡына күргеләп ҡала башланы Мир. Уның бында ни эшләп йөрөүен иплəп кенә һорашҡайны, уның оҙаҡ йылдар һалдаттарҙы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеүе асыҡланды. Быға иғтибар ғына бирмәгән, күрәһең. Бер аҙҙан иһә уны теге ҡарт ял көнө баҡсаһында эшләшергә саҡырған булып сыҡты. Дөрөҫөн әйткәндә, эшләтеүҙән дә бигерәк, нисек итеп рус һалдатына рәхмәтен белдерергә белмәй йөҙәй ине, шикелле. Взвод командиры "Үҙең теләгән бер иптәшең менән барырһың, иртәнге сәғәт 10-да ҡапҡа янында көтөп торор", - тигәс, баш тартырға булып китте. Ләкин командир бойороғон үҙгәртмәне, һөҙөп кенә бер ҡараны ла: "Кругом марш! Выполнять приказ!" - тип кенә ебәрҙе.

Яҡташы, районлашы булған башҡорт егете Исмәғилде алып, сәғәт унда увольнительнаяға сығып киттеләр. Тышта ысынлап та, оҙон арба егелгән атының йүгәненән тотоп, әлеге ҡарт тора. Тәбәнәгерәк буйлы, киң яурынлы, ҡасандыр ҡап-ҡара булған шырт сәстәренә, ҡыҫҡа ғына һаҡал-мыйығына сал төшкән мөләйем йөҙлө ине Юрген Коссман әфәнде. Үҙ телендә сәләмләп, арбаға йәтешләп ултырырға булышҡан ҡарт русса ла апаруҡ шыма ғына һөйләшә булып сыҡты. Ул һалдаттарға өйҙә ҡыҙы менән ҡатыны көтөүен, алма-груша йыйышырға кәрәк икәнлеген һөйләне. Мир менән Исмәғил ҡайтарып яуап бирмәне. Улар офицерҙарҙың йыш ҡына йорт эштәрендә булышырға ауыл егеттәрен йә оҫтараҡ һалдаттарҙы ярҙамға саҡырып алыуҙарын ишетеп кенә түгел, күреп тә беләләр ине. Тик әлегәсә береһенең дә немец ғаиләһенә саҡырылғаны юҡ ине. Парк биләмәһе эргәһенән атты юрттырып ҡына үтеп, йәшел үлән баҫҡан урман юлына төштеләр. Ике яҡтан көкре-бөкрө иләмһеҙ имән ағастары, миләш-балан, ҡарағай-шыршы үҫкән урман буйлап ярты сәғәттәй барғас, ҡапыл ғына бейек ҡойма менән уратылған ихатаға килеп сыҡтылар. Был ишек алдына иңгәс, Мир йәнә бер аптыраны. Уларҙың ауылында, хәйер, бөтә Совет иленең ауылында бындай ҙур ихатаны күргәне булмағандыр. Уларҙа кескенә ишек алды, кәртә-ҡура, мунса, ҡайһыларында аласыҡ, йә асыҡ усаҡлыҡ. Йәнә йәтеш кенә картуфлыҡ. Быларҙың иһә ихатаһы күҙ күреме етмәгән ергә һуҙылған. Емеш баҡсалары баяғы парк кеүек, әллә ниндәй ят үҫемлектәр, ят емештәр тәлгәшләнеп ултыра. Йәшелсә баҡсаһы уларҙың колхоз баҫыуындай барҙыр, билләһи! Өйҙәре ҡыҙыл кирбестән ныҡ, бейек, матурлап һалынған. Башҡа ҡаралтылары ла кирбестән, буғай, тик улары эзбизләп ағартылған.

- Ошо йорт, ихата бары һеҙҙеке генәме?- тип аптырап һораясаҡ ул торараҡ үҙе ҡотҡарған ҡыҙҙан - Иолантанан.

- Эйе, ә кемдеке һуң? - тип көләмһөрәне немец ҡыҙы.

- Бигерәк ҙур бит! Нимәгә ул хәтлем?- тиер Мир.

- Беҙҙе ашатҡан да, кейендергән дә шул еребеҙ инде! Баҡсабыҙ, мал-тыуарыбыҙ!

Фермала эшләп, колхоз өсөн тир түгеп, өйҙә бер һыйыр, өс-дүрт баш һарыҡ аҫыраған, уларҙан бер тин дә килем алмаған, киреһенсә, дәүләткә итен дә, һөтөн дә, башҡаһын да һалым өсөн тапшырып торған егеттәр быны аңлай алмаясаҡ та...

Алма-грушаһын да, йәшелсә-картуфын да йыйышты, ҡаҙышты Мир ул көҙҙә Коссмандар ғаиләһенә. Аҙна һайын тигәндәй уны саҡырып торҙолар. Үҙе генә лә, берәй иптәше менән дә барырға тура килде уға. Командирҙар менән ниндәй хәҡҡә килешкәндәрҙер, Мир өсөн был ҡапҡа һис шығырҙамай асылды, һиҙҙермәй генә артынан ябылды.

Ә Мир инде онота башлаған рота командирының һүҙе дөрөҫкә сыҡты бит: саф алдына сығарып "За проявленную бдительность, смекалку и предотвращение преступной деятельности групп лиц в отношении гражданки Германии" тип, рәхмәт белдерелде, өлкән сержант званиеһы бирелде. Был рәхмәт һәм звание шәхси йәһәттән Мир Зиннәтуллинға берәй файҙа бирҙеме икән? Юҡтыр, моғайын. Ул үҙен бер башҡа үҫеп киткәндәй ҙә тойманы, хеҙмәттәштәре араһында абруйы ла артып китмәне, ахырыһы. Иптәш булғандары менән шулай уҡ дуҫ булып ҡалды, битарафтары әүәлгесә вайымһыҙ, яратмағандары элеккесә үҙһенмәгәндәр сафында ҡалды. Бары үҙенең намыҫы алдында һаман да ғәйеп тойғоһо выжданын кимереүен дауам итте...

Ул ваҡыттағыса өс йыллыҡ хеҙмәттең ярты йылы Башҡортостанда "учебка"ла үтһә, ҡалған ике йыл ярымдың ике йылы Коссмандар ғаиләһе менән тығыҙ аралашыуҙа барҙы һәм көндәрҙең, айҙарҙың йәһәтерәк үтеүенә лә булышлыҡ итте. Тәүҙә телде өйрәнеү өсөн тик немецса ғына аралашты Мир улар менән. Бигерәк тә Юрген ҡарт менән әңгәмәләр уны ылыҡтырҙы. Башҡалар араһында аҙ һүҙле булып күренгән бабай Мир менән аулаҡта ҡалһа, уғата асылып китә, үҙенең үткән тормошон һөйләп ташлай. Тәүҙә уҡ ҡарттың русса һәйбәт һөйләшеүенә аптырағайны егет, әммә уның рус гарнизоны менән килешеү нигеҙендә байтаҡ йылдар эшләүен белгәс, ошо хеҙмәттәшлек һөҙөмтәһелер, тип уйлағайны.

- Ә бит мин, улым, һинең яҡташың, Рәсәй кешеһе, - тип һалды ул бер ваҡыт Мирҙы аптыратып.

- Нисек инде Рәсәй? Советтар Союзынанмын тип әйтмәксеһегеҙме?

- Һеҙҙең өсөн ул СССР, минең өсөн Рәсәй, - тип тыныс ҡына яуапланы ла ҡарт байтаҡ уйланып ултырҙы. - Минең атайым молдаван, әсәйем йәһүд ине. Беҙ Бессарабияла, бер ҡайғыһыҙ, етеш мул тормошта йәшәнек. Әммә быуат башында илдә күтәрелеш башланды, батшаға ҡаршы ҡорал күтәреү, забастовкалар, митингылар йышайҙы, интеллигенция, студенттар, эшселәр ыңғайына крәҫтиәндәр ҙә баш күтәрҙе. Бессарабияла күп помещиктарҙың усадьбаларын яндырҙылар, үҙҙәрен һуйып сыҡтылар... Был вәхшилек беҙҙең имение яғына яҡынлағас, атайым, әсәйем һәм мин әсәүләп өҫтөбөҙҙә булған кейем менән генә аҡса, алтын-көмөшөбөҙҙө, документ-фәләнде генә алдыҡ та, ҡасып киттек. Төрлө ауылдар, хуторҙар аша йәшеренеп, төндә генә барып, көндөҙөн урмандарҙа йоҡлап, тәүҙә Австро-Венгрияға, унан Германияға сығып, ошо һаҙлыҡлы, кеше бигүк аяҡ баҫмаған, ерегеп йәшәмәгән ергә килеп төпләндек. Тәүҙә ташландыҡ бер һарайҙа йәшәп торҙоҡ, ҡышҡа тиклем бәләкәй генә өй ишараты әтмәләп индек. Миңә ул саҡта 15 йәш самаһы ине. Беҙ ер кешеләре, ерһеҙ йәшәй алмайбыҙ, башҡа төрлө йәшәй ҙә белмәйбеҙ. Был беҙҙең ҡаныбыҙҙа, хатта исемем дә минең урыҫсаға ауҙарһаң "крәҫтиән" тигәнде аңлата...

**(Дауамы. Башы 45-46-сы һандарҙа).**

# МИН ҮҘЕМДЕ СӘХНӘЛӘ ТАПТЫМ,

## ә асылымды һаман эҙләйем

**Стәрлетамаҡ башҡорт дәүләт драма театры артисы Фәрзәнә ҒӨБӘЙҘУЛЛИНА береһенән-береһе сағыуыраҡ, йөкмәткелерәк образдары менән тамашасылар күңелен күптән яулап өлгөрҙө. Сәхнәлә үҙен тапты инде ул. Ә бына "Был донъяға ниңә килгәнбеҙ?", "Ҡайҙа китеп барабыҙ?" тигән һорауҙарға яуап таба алғаны юҡ әле. Һаман эҙләй. Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Фәрзәнә Йәһүҙә ҡыҙы менән әңгәмәбеҙ ошо хаҡта.**



**➔ Фәрзәнә, сәхнәгә тәүге тапҡыр бейеүсе булып аяҡ баҫҡанығыҙҙы беләм. Һомғол буй-һынығыҙ, бейеүселәргә генә хас ихлас йылмайыуығыҙға, атлап йөрөшөгөҙгә ҡарап та һеҙҙә бейеүсене танып була. Артист булмаһағыҙ, ихтимал, төп һөнәрегеҙ итеп бейеү сәнғәтен һайлар инегеҙ. Сәнғәткә тартылыуҙан ҡаса алмаҫ инегеҙ, моғайын. Ҡасан һәм нисек драма артисы булырға ҡарар иттегеҙ?**

- Нәҫелебеҙҙә атайым яғынан да, әсәйем яғынан да йыр-моңға маһирҙар булған һәм бар. Олатайым аслыҡ заманында ла скрипкаһын ҡулынан төшөрмәгән. Ауыл халҡы атайым яғынан олатайымдың скрипкала уйнауын тыңлар өсөн кистәрен беҙгә йыйылыр булған, хатта күрше ауылдарҙан да килгәндәр скрипка тигән серле музыка ҡоралының сихри моңон тыңларға. Ә әсәйемдең бер туған ҡустыһы Муллағәле Латипов Башҡорт дәүләт филармонияһында эшләне. Йырлай башлаһа, тауышы менән өй тула ла ҡуя ине, көслө тауышлы, киң диапазонлы йырсы ине ул. Халыҡ йырҙарын бик оҫта башҡара ине. Шуға күрә сәхнәгә тартылыуым ҡан аша ла бирелгәндер, тием. Ә шулай ҙа һигеҙ бала араһынан мин бер үҙем сәнғәт юлын һайланым. Бәләкәйҙән һүрәт төшөрөргә яраттым. Тораҡ был шөғөлөмдә бейеү алмаштырҙы.

Мәктәптә тамамларға йөрөгән йылды Салауат театрына тәғәйенләнгән курс өсөн һайлап алыу туры үткәрергә килгәйнеләр. Йырлап, бейеп, шиғыр һөйләп күрһәттем, кемде һынландырырға ҡушалар (ул ваҡытта этюд һүҙен белмәйем әле), шуны үтәнем. Һайлап алыу турын үттем, артабанғы һынауҙар өсөн Өфө сәнғәт академияһына барырға ҡуштылар. Тап шул йылды әсәйем ныҡ итеп ауырып китте. Иң бәләкәй бала булараҡ, әсәйемде мин ҡарарға, киләсәктә, бәлки, эргәһендә ултырырға ла тейеш буласағымды аңлап, үҙемде медицина менән бәйләргә ҡарар иттем һәм Салауат медицина училищеһына уҡырға индем. Ике айҙан һуң, хаталанғанымды аңлап, икенсе йыл Өфө сәнғәт академияһына барыу ниәте менән ауылға, әсәйем эргәһенә ҡайтып киттем. Йәйгә тиклем мәктәптә пионервожатый булып эшләп, Өфөгә юлландым. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, ул йылды башҡорт төркөмө йыймағайнылар, шулай ҙа һынауҙар тоттом һәм рус төркөмөнә уҡырға инеп киттем. Ауыл балаһына ҡала ҡыҙҙары менән бер төркөмдә уҡыуы ауырыраҡ бирелде һәм бер курс уҡығандан һуң, тағы ла ҡайтып киттем. Етмәһә, әсәйемдең ауырыуы ла көсәйгәйне ул мәлдә. Тағы бер йыл үтеп китте.

Йәй көнө гәзиттә Стәрлетамаҡ ҡалаһында Илшат Йомағоловтоң театр-студияһы асылыуы хаҡында иғлан күреп ҡалдым. Бер аҙ ныҡышып алған әсәйем дә уҡырға барырға кәрәклекте тылҡый башланы. Мин ниндәйҙер ҡаларға килгәндә йәй үткәйне инде. Һуң булһа ла Стәрлетамаҡҡа юлландым. Театрҙа Гөлдәр апай Ильясованы осраттым. Хәлемде һөйләп бирҙем. "Ул һорауҙы мин үҙем генә хәл итә алмайым, Илшат ағай әле генә сығып китте, бар, уны табып, үҙе менән һөйләш", - тине. Театрҙан сыҡтым да, нимә эшләргә белмәй, тирә-яҡҡа ҡарап торам. Ҡараһам, театрҙың ҡаршыһындағы парк буйлап һап-һары ҡайындар араһынан ғорур атлап, мөһабәт кәүҙәле, ҡара эшләпә, ҡара плащ кейгән ир кеше китеп бара. "Илшат аға-а-а-ай!" тип ҡысҡыра-ҡысҡыра шул һын артынан йүгерҙем. Үҙемде таныштырҙым, хәлдәремде һөйләп бирҙем, ул мине тыңланы һәм дәрестәренә саҡырҙы. Иртәгәһенә дәрескә барҙым, әле һынау үтмәгәнлегемде лә онотоп, бер ай самаһы уҡып өлгөргән студенттар менән бергә этюдтарҙа ҡатнаштым. Илшат ағайҙан алған тәүге дәресем минең өсөн имтихан да булды - студияла уҡып алып киттем. Аллаға шөкөр, Илшат ағайҙың класында актерлыҡ оҫталығына уҡыу бәхете тейҙе миңә. Башҡорт театры тарихында ул булдырған сәнғәт мәктәбен үтеү, ысынлап та, бәхет.

**➔ Тәбиғи матурлыҡ, нәзәкәтлелек - ҡатын-ҡыҙ артистың ярты уңышылыр ҙа, бәлки. Әммә артист һөнәрен һайлағанһың икән, 20 йәшеңдә әбейҙәр һынына инергә лә, йә булмаһа, тәбиғәтеңә бөтөнләй тура килмәгән образдарҙы ла уйнарға тура килә. Бөтә ролдәргә лә еңел инәһегеҙме, әллә ролде сығарыу өсөн булмышығыҙ менән тартҡылашҡан саҡтарығыҙ ҙа бармы?**

- Аллаға шөкөр, сәхнәләге яҙмышымда үҙемде төрлө амплуала һынап ҡарарға насип булды. Карпенко-Ҡарыйҙың "Бәхетһеҙ мөхәббәт" драмаһындағы (режиссеры Гөлдәр Ильясова) төп героиня Варьканың холҡон тыуҙырыу, уның менән сәхнәлә булһа ла килешеп йәшәү ауыр ғына булды, әммә ҙур сәхнәләге тәүге ролем булараҡ ҡәҙерле, ғәзиз ул миңә. Үҙемде ниндәйҙер кимәлдә һындырырға ла, сәхнәлә үҙемде табырға ла ярҙам итте миңә был роль, талапсанлыҡҡа, иң беренсе үҙ-үҙемә талапсанлыҡҡа өйрәтте. Флорид Бүләковтың "Ҡатын-ҡыҙҙың ҡырҡ сырағы" драмаһындағы Алһыу образында, әйтерһең дә, үҙемдең бала сағымды һынландырҙым! Үҙемдең булмышымдағы эскерһеҙлек, ярҙамсыллыҡ, башҡаларҙың проблемаларын үҙ йөрәгең аша үткәреү кеүек сифаттарҙы Алһыуға күсереү ҡыйын булманы.

Туфан Миңнуллиндың "Ай булмаһа, йондоҙ бар" драмаһындағы (режиссеры Азат Йыһаншин) Хәмиҙә роле - тәбиғәтемә бөтөнләй ят холоҡло образ. Булмышым менән тартҡылаша торғас, яһиллыҡ, ялағайлыҡ, көнсөллөк бөркөп торған образды тыуҙыра алдым. Хәмит Иргәлиндың "Инә бүре ҡарғышы" драмаһындағы (режиссеры Г.Ильясова) Ғәшүрә образы өҫтөндә эшләгәндә, ҡатын-ҡыҙ булараҡ та, шәхес булараҡ та бер башҡа үсеп киткәндәй тойҙом үҙемде. Сабыр ҙа, оялсан да башҡорт ҡатындары, Тыуған илгә ҡурҡыныс янағанда, ат атланып яуға сабыр батыр, сая, көслө рухлы ил инәләренә әйләнә.

Борис Васильевтың "Ә таңдар бында тыныс..." әҫәре буйынса (режиссеры Фәнис Кәримов) ҡуйылған драмала кесе сержант Маргарита Осянина образын да күңелдәге ҡапма-ҡаршылыҡ аша тыуҙырҙым. Ҡатын-ҡыҙҙың һуғыш михнәттәре аша үтеүен күңел ҡабул итмәй, шуға ла Осяниналағы ҡатын-ҡыҙ асылы менән һуғыштың бөтөнләй килешеп йәшәй алмағанлығын, һуғышҡа ҡаршы нәфрәтте ышанылы күрһәтә алдым, тип уйлайым. Руслан Юлтаевтың "Өс хат" картинаһында һуғыштың икенсе яғы - тыл тормошо һүрәтләнә. Унда мин почтальонканы уйнаным. Шулай уҡ ҡапма-ҡаршылыҡлы булыуы менән иҫтә ҡалған образ. Өйҙән-өйгә үлем хәбәре ташып йөрөү еңел булғанмы ни почтальондарға! Мостай Кәримдең Мәскәү режиссеры Антон Федоров сәхнәләштергән "Өс таған" драмаһындағы Әсә ролендә әсәйемдең булмышын һынландырырға тырыштым. Үҙемә лә әсәй булараҡ ситтән ҡарау мөмкинлеге булды был ролем. Сәбәләнмәйенсә, ғазапланмайынса, һынауҙар менән бәхәскә инмәйенсә генә балаларың өсөн ғүмереңде бирергә әҙер булыуыңды күрһәтеү еңел түгел, ә тамашасыны ышандырырға кәрәк. Тәрән уйланыуҙар аша тыуҙы был образ. Һанай китһәң, ролдәрем байтаҡ йыйылған. Уларҙың һәр береһе ғәзиз, яҡын, үҙ.

**➔ Хәләл ефетегеҙ менән танышыуығыҙ хәс тә кинофильмдарҙағы һымаҡ. Һөнәре буйынса театрҙан бөтөнләй алыҫ йөш егет осраҡлы рәүештә генә һеҙ уйнаған спектаклгә килә. Сәхнәләге Фәрзәнәгә ғашиҡ була. Һеҙҙе тағы бер күрер өсөн театрға йөрөй башлай. Бер барғанында, осраҡлы ғына иғлан күреп ҡалып, отпускыла булыуынан файҙаланып, театрға эшкә урынлаша. Театр һеҙҙе таныштыра, ҡауыштыра. Тормош - ул театр, тиһәләр ҙә, тормош сәхнә уйыны түгел. Сәхнәләге артист Фәрзәнә менән тормоштағы Фәрзәнә араһында ла айырма барҙыр. Һеҙ тормошта ниндәй?**

- Эйе, танышыуыбыҙ тап шулай булды. Аллаға шөкөр, бына 26 йыл бергәбеҙ, Батырхан исемле ул тәрбиәләйбеҙ. Сәхнә шәхси тормошто йота. Әгәр ҙә актерҙарҙы яҡындары аңламаһа, һанламаһа, театр менән ғаилә араһында өҙгөләнергә тура килә. Ғаиләң - ҡәлғәң булһа, еңелерәк. Аллаға шөкөр, ғаиләмде ҡәлғәм тип әйтә алам. Беҙҙе осраштырған өсөн Аллаһы Тәғәләгә рәхмәт уҡыйым. Уның һәр премьераға гөлләмә тотоп килеп, минән күҙен алмай ҡарап ултырыуы икебеҙгә лә оло кинәнес бирә.

Тормошта мин ниндәймe? Нисек бармын - шулаймын: алсаҡмын, ихласмын, рәхмәтлемен, иплемен. Ҡыҙып та кителәйем, әлбиттә, әммә кешене рәнйетеүҙән тыйылам, хатта ҡурҡам. Тирә-яғында матурлыҡ тыуҙырырға ынтылыу, йыйнаҡлыҡ кеүек сифаттар әсәйемдән күскән. Әсәйем тегенсе ине. Ҡурсаҡтар һымаҡ, аллы-гөллө күлдәктәр кейеп үҫтек беҙ. Шул күлдәктәрҙе кейеп, күҙгә алдында матурланып-сөйөрөлгәндә һәр саҡ матур булырға ынтылыу теләге һалынғандыр, тием. Әсәйем менән атайымдың бер ҡасан да эшһеҙ ултырғанын күрмәнем. Колхозға эшләп ҡайтҡандан һуң, һарай тултырып мал-тыуар, ҡош-ҡорт аҫрап улар, беҙҙе лә ошо эшкә йәлеп итеп, донъя көтөргә өйрәттеләр. Тырышлыҡ, ныҡышмалылыҡ улар өлгөһөндә тәрбиәләнде.

Йәшәйеш менән мөнәсәбәттәрҙе көйләргә тағы бәләкәйҙән үҙемдә күҙәткән бер холҡом да ярҙам итә. Мин бала саҡтан уйланырға, кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәттәрен күҙәтергә һәм һығымта эшләргә яраттым. Башҡалар сыр-сыу уйнағанда, мин урманға, ҡайындар араһына, йылға буйына сығып китеп уйланып йөрөй торғайным. Тәбиғәткә сығып, үҙ-үҙем менән аралашып үҫтем. Мине борсоған һорауҙар бала саҡта үҙемә лә бик сәйер тойола ине: япраҡ ни өсөн тап ошолай яралған, йылға ни өсөн аға, беҙ был донъяға ни өсөн килгәнбеҙ, ҡайҙа китеп барабыҙ, ни өсөн кешеләрҙең холоҡтары төрлөсә, үлгәс, кеше менән нимә була - бына ошолайыраҡ һорауҙарға яуап эҙләй инем. Әле лә уйланырға яратам, үҙ-үҙем менән диалогҡа инә белеүем холҡомдо көйләргә, теләнде йүгәнләргә, уйҙарыңды барларға ла ярҙам итә. Уйланған арала ҡыҙған булһаң - һыуынап, асыуланған булһаң - асыуыңды онотоп өлгөрәһен. Героиняларымдың холоҡ-һыҙаттарын да ошолай уйланып, эҙләнеп табам. Тап уйлана белеүем, үҙ-үҙемә һорауҙар бирергә өйрәнеүем, күҙәтеүсән булыуым мине театрға ла алып килгәндер әле, бәлки. Ошо һорауҙарға яуап эҙләп, мин үҙемде тетрҙа, сәхнәлә таптым, ә асылымды һаман эҙләйем.

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛИНА**
**әңгәмәләште.**

ИНТЕРНЕТТАН



# МОТЛАҠ ИКМӘК АША!

■ Испания ғалимдары раҫлауынса, туҡланыу рационынында икмәк мотлаҡ булырға тейеш. Белгестәр йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуы хәүефе юғары булған 275 оло йәштәге кешене тикшереп ҡараған. Һөҙөмтәлә, көн һайын икмәк ашаусыларҙың ҡаны күпкә сәләмәтерәк булыуы асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Рафаэль Ллорах билдәләүенсә, икмәк баланслы диетаның элементы булып тора. Икмәкте даими ҡулланыусыларҙың ҡанында инсулин кимәле лә түбән, был үҙ сиратында туҡымаларҙың инсулин тәьҫиренә бирешмәүен булдыра, тимәк, диабет һәм йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Диетологтар ҙа икмәк ашауға күптән ыңғай ҡарай. Улар фекеренсә, ҡала кешеһе был аҙыҡты көнөнә 200 грамм ашарға тейеш.

■ Белгестәр иҫәпләп сығарыуынса, офис хеҙмәткәрҙәренең дүрттән бер өлөшө хроник күнел төшөнкөлөгөнән яфалана икән. Бындай саҡта уларға ҡаһүә һәм шоколад ярҙамға килә. Британия тикшеренеүселәре офистарҙа эш көндәре нисек үтеүен өйрәнеп, эш урынындағы төшөнкөлөктөң хеҙмәткәрҙең хеҙмәте сифатына ғына түгел, ә физик һәм психик сәләмәтлегенә тәьҫир итә икәнен асыҡлаған. 102 хеҙмәткәрҙән һорау алғандан һуң, уларҙың ҙур ғына проценты был төшөнкөлөктө ҡаһүә эсеп йәки шоколад ашап "баҫа", уларҙың ҡайһы берҙәре эш көнөнән һуң спиртлы эсемлектәр ҡулланыуы асыҡлана. Эште күнелле итеп алып барған, хеҙмәткәрҙәр бер-береһе менән йыш аралашҡан коллективтарҙа бындай хәл һирәк осрай, ти тикшеренеүселәр. Шулай уҡ етәксе талапсан булған урындарҙа ла хеҙмәткәрҙәрҙең күнелһеҙләнеп, төшөнкөлөккә бирелеп ултырырға ваҡыты юҡ.

■ Канаданың сәләмәтлек проблемаларын тикшереү институты ғалимдары кәнәш итеүенсә, дарыуҙар ҡабул иткәндә грейпфрут емеше ашарға ярамай. Доктор Дэвид Бэйли белдереүенсә, грейпфрут дарыуҙың тәьҫирен арттырыу йәки уның көсөн кәметеү сифатына эйә. Ә был сәләмәтлек өсөн дә, пациенттың ғүмере өсөн дә хәүефле. Грейпфруттың составында булған фуранокумарин матдәһе ашҡаҙан-эсәк трактындағы энзимдарға тәьҫир итә һәм дарыуҙың үҙләштерелеү күрһәткестәрен үҙгәртә. Табиптар хәҙер был туралағы мәғлүмәттең дарыуҙарҙың ҡабына яҙылыуын талап итә.

■ Сегален исемендәге Бордо университетында (Франция) үткәрелгән һынауҙар күрһәтеүенсә, автомобиль салонын яҡтыртыусы күкһел төҫтәге ут кофеин тәьҫиренә тиң икән. Ғалимдар тикшереүҙәрҙә ҡоролмалар панеленә төнөн йөрөгәндә яҡтырып торған күкһел лампа ҡуйылған автомобиль ҡулланған. 48 ирегет ошондай автомобилдә өс сәғәт эсендә 15 минутлыҡ ҡына туҡталыш яһап, 400 км араны үткән. Юл буйына водителдәр йә ошо яҡтыртҡысты ҡулланған, йә ҡаһүә эскән. Уяулыҡты йәки уның түбәнәйеүе күрһәткесе итеп юл линиялары ҡулланылған. Тест һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, күкһел яҡтыртҡыс ҡулланыусылар был линияны уртаса - 15, ҡаһүә эсеүселәр - 13, кофеинһыҙ ҡаһүәне өҫтән күреүсе водителдәр 26 тапҡыр киҫкән. Шулай итеп, был һөҙөмтәләр хәүефһеҙлек системаһын эшләгәндә ҡулланылыуы мөмкин, ти ғалимдар.

СӘХИФӘНӘН

# БАРЫБЫҘ ҘА БЕР АРБАЛА



**Былтыр беҙ көҙөн үҙ машинабыҙҙа Ҡырымға юллангайныҡ. Кешеләр йәй артынан йөрөй, беҙ көҙ алтынын юллап барҙыҡ була инде. Ауыл кешеһенә йәй мәшәҡәтенән айырылып сығып китеүе ауыр. Ниәт итәһең дә ул. Теге эшемде, был эшемде ослайым да, тип йөрөп, йәй үтә лә китә.**

Юлға сығам тигән төндә ҡар яуҙы, юлдарҙа боҙлауыҡ ине. Машинаға ҡышҡы тәгәрмәс кейҙереп алырға тура килде. Ғәҙәттәгесә, юлдағы ҡалаларға инеп, сәйәхәт ҡылып барып еттек ярымутрауға. Унда салт аяҙ, йылы ине. Көҙҙөң бар хозурлығы, муллығы, иҫ киткес матурлығы менән ҡаршы алды беҙҙе Ҡырым. Севастополдең үҙәгендәге отелдә урынлаштыҡ. Шул нөктәнән төрлө яҡҡа сәйәхәт итеү уңайлы. Унда көҙөн дингеҙ буйында ҡыҙынып ятыр өсөн бармайҙар. Ғөмүмән, диңгеҙгә беҙ нисектер битараф ул. Беҙ ялдан ял итеп түгел, арып ҡайтабыҙ, тиһәң дә була. Иртә торабыҙ. Тамаҡ ялғап алабыҙ ҙа, кистән билдәләнгән маршрут буйынса сығып китәбеҙ. Үҙ машинаң менән йөрөүҙең уңайлыҡтары күп, әлбиттә. Кисенә теләнде арҡыры тешләп, әммә үтә ҡәнәғәт булып ҡайтып йығылаһың. Тәьҫораттар - бихисап.

Нинә башланым әле был хәбәрҙе? "Тағы бараһығыҙмы инде Ҡырымға?" - тип һорап ҡуйҙы бер интернет дуҫым. Ниндәйҙер ҡәнәғәт, мыҫҡыллы тон менән. Ҡырым күперендәге фажиғәнән һуң...

Әҙәм балаһының юлы ҡайҙарға ятырын бер Аллаһы Тәғәлә белә. Ә беҙ, бәндәләр, ниәтләнергә, хыялланырға ғына булдырабыҙ. Хоҙай насип итһә, барылыр, тим мин дә. Ҡырымға ғына түгел, ҙур илебеҙҙең төрлө тарафтарына төшһөн юлыбыҙ. Һаулыҡ кәрәк. Донъяларҙың именлеге кәрәк...

Эйе, Ҡырымға бер тапҡыр барған кеше был яҡтарҙың ниндәй тартыу көсөнә эйә икәнен белә. Болоттарға ашҡан ап-аҡ тауҙары, күҙҙең яуын алған тәбиғәте, мөһабәт ҡаялары, боронғолоҡ һеңгән хәҙергеһе арбай, иҫ киткес хискә сорнай. Сорнай һәм тыуған яғыңдың ҡәҙерен белдерә. Эйе, эйе. Сит яҡтарҙа йөрөгәндә тыуған яҡҡа булған һөйөү һағыш, һағыныу булып урғыла...

Ҡырымдағы халыҡтың ихласлығы тураһында әллә күпме һөйләргә була. Машинаның сит төбәк номерын күреп, ҙур ҡаланың юл саттарында ымлап үткәреп ебәрһендәрме, кафе, магазиндарҙа турист икәнеңде аңғарып, иғтибар, ихтирам бүлһендәрме, һорағаныңа яуапты риза булып, ентекләп бирһендәрме - барыһы ла яҡты хәтирә булып һаҡлана. Кемегеҙҙәр, туристарҙан аҡса килә, шуға яҡты сырай күрһәтәләрҙер, тип әйтер. Юҡ, уға ғына түгел. Уға ғына түгел икәнен барған, күргән кеше аңлай.

Баҡсаһарайҙа ҡырым татарҙарының бизнесы сәскә ата. Бер магазиндарынан бәләкәй генә балаҫ һатып алдым. Юрамал "Һаумыһығыҙ!" тип биргән сәләмемә ихлас итеп үҙенсә сәләм биргән ҡырымлы ҡыҙының йөҙөндә, һөйләшеүендә бер ниндәй ҙә үс, үкенес, сараһыҙлыҡ һиҙмәнем.

Референдум тураһында шәхси ҡараштарын белергә тип, кешеләрҙән илдәге хәлдәр тураһында һораштыҡ. "Көтөп алдыҡ!" - шундай кәйеф ине һәр береһендә. Референдумға таңдан сират алғандар. Бер ниндәй көсләү, ҡыуыу, фальсификация булмаған.

Төҙәкләндереү эштәре бара. Ярым емерек, иҫке йорттар күп. Үҫеш бында 90-сы йылдарҙа туктап ҡалған. Украинаның етем балаһы булғанлығы күҙгә нык ташлана. "Һеҙ беҙҙе ике-өс йыл элек күрһәгеҙ ине. Яйлап матураябыҙ әле", - тиҙәр. Кешеләрҙә иҫ киткес оптимизм. Төшөнкөлөккә бирелгән, бербереһен күрә алмаған халыҡ йәшәмәй унда. Улар берҙәм. Бөгөн дә шулайҙыр улар.

Әлеге "Махсус операция" тип аталған һуғышты бер кем дә теләмәй бит. Ҡан көҫәгән бер кем юҡ беҙҙең арала ла. Был хәлгә төрлө күҙлектән ҡарағандар ғына бар. Һәм сит фекерҙе нәфрәт утында тотҡандар бар.

Ундай "һүҙ азатлығы" өсөн көрәшкәндәр сит фекерҙе ҡабул итерлек хәлдә түгелдәр. Алдынғы, мәҙәни ил төҙөргә ынтылғандарҙың ауыҙынан әшәке һүҙҙәр ҙә ишетергә тура килә ҡай саҡ. Хаяһыҙлыҡта ярышалармы ни! Үҙе тәртипһеҙ кешенең артынан кемдәр эйәрә? Дөрөҫ. Тәртипһеҙҙәр, тәрбиәһеҙҙәр, иманһыҙҙар ғына. Бер кешене батырғанда, бысраҡҡа буяғанда сәпәкәй сабып, һөсләтеп торғандарҙан нимә көтәһең? Битарафлыҡ, бәғерһеҙлек. Иртәгә улар ире тукмаған ҡатынды, тиҫтерҙәре йәберләгән үҫмерҙе, урамда тәгәрәгән ауырыуҙы, хәйер һораған гәрипте, эттәр талаған бесәйҙе урап үтәсәк. Яман яманды яралта, яҡшылыҡтан яҡшы тыуа...

...Тарих арбаһы бәрәү генә. Эргәндәге бәрәүҙе тешләп, талап төшөрөп ҡалдырып булмай ул. Хаҡлылар, яһилдар, шымдар - барыбыҙ ҙа шул бер арбала китеп барабыҙ. Шалтыр-шолтор, дөңгөр-даңғыр. Туктап ҡалған дәүерҙәр ҙә юҡ. Быныһы ла үтер. Кемебеҙҙе ҡайһы тәңгәлдә бушатыр...

**Наилә ХӘМБӘЛИЕВА.**

ХӘТЕРЛӘП...

# ЫҢЙЫ ЙЫЙЫУСЫЛАРҘАН БУЛДЫ УЛ

**Салауат районы Малаяҙ ауылында, Салауат Юлаев музейында билдәле уҡытыусы, Башҡортостандың мәғариф отличнигы, хеҙмәт ветераны, һәүәҫкәр фольклорсы Зәнүфә Ғарифуллинаның хәтер кисәһе булып үтте. Бар йәмәғәтселек менән хөрмәтләп иҫкә алдыҡ уны баҡыйлыҡҡа күскән көнөндә. Сауаплы эш атҡарҙы Салауат Юлаев музейы коллективы, Зәнүфә апайҙың ҡыҙҙары Зөлфиә һәм Әлфиә.**



Бәләкәйҙән белемгә ынтылып, бар ҡаршылыҡтарҙы енеп, Башҡорт дәүләт университетының тәүге ҡарлуғастары араһында юғары белем алған ауыл уҡытыусыһы Зәнүфә Ғарифуллинаның тормош юлы һоҡландырғыс һәм фәһемле, халҡына хеҙмәт итеүҙең лайыҡлы өлгөһө.

Беҙ уның менән 2000 йылдарҙа яҡындан аралаша башланыҡ. Ул инде пенсияла, әммә бер фольклор байрамын да уның ҡатнашлығынан башҡа күҙ алдына килтереп булмай. Әле ул йылдарҙа үҙе шәхсән тегеп кейгән башҡорт милли кейемендә Зәнүфә апайҙан башҡа бер кем дә йөрөмәй ине. Тәңкәләрен сылтыратып, күҙҙең яуын алырлыҡ зауыҡлы итеп кейенә, бар ҡиәфәтендә башҡорт ҡатын-ҡыҙына ғына хас әҙәплелек, иплелек ята. Сихри йылмайыуы, мөләйемлеге менән Зәнүфә апай һәр кешене үҙенә ылыҡтыра, ә инде үҙе менән алып йөрөткән башҡорт халҡының көнкүреш әйберҙәре менән таныштыра башлаһа, бар тамашасыны арбай ҙа ҡуя.

Үҙенең тыуған ауылы Иҙелбайҙа фольклор ансамбле төҙөп, драма түңәрәктәрен йәнләндереп, мәктәп уҡыусылары менән дә, ололар менән дә төрлө сараларҙа ҡатнашып, дәртләнеп, ҡайнап йәшәне ул. Заманында хәләл ефете менән ауылдарында беренселәрҙән булып этнографик йорт-музей ҙа ойошторалар. Ә Малаяҙҙа Салауат Юлаев музейы асылғас, унда етмешкә яҡын экспонат тапшыралар.

2000 йылдарҙың данлы, шаңлы Салауат йыйындарының иң сағыу йондоҙо булды Зәнүфә апайыбыҙ. Ошо йылдар Зәнүфә Ғәүнетдин ҡыҙының ысын мәғәнәһендә йондоҙло мәле булған, сөнки ғүмере буйы йыйып туплаған ауыҙ-тел ижады ташҡа баҫтырып, китап итеп сығарыуға ла өлгәшкәйне ул. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Салауат районында йыйған риүәйәттәр, һынамыштар, көләмәстәр, йырҙар, таҡмаҡтар һәм мөнәжәттәрҙән торған "Йүрүҙән ыңйылары" тигән ул китабы бөгөн бик аҙ ғына кешеләрҙә һаҡлана. Уны ҡабатлап баҫтырыу сараһын күрергә кәрәк ине, тигән теләк белдерҙе йыйылған тамашасылар.

Рәми Ғариповтың: "Мин халҡымдың сәскә күнеленән бал ҡортондай ыңйы йыямын..." - тигән шиғыр юлдары уның яҡташы, йәштәше Зәнүфә апай Ғәрифуллинаның да тормош девизы була. Шундай берҙән-бер генә, үҙенсәлекле илаһи күнелле, эшлекле, бөтмөр шәхес ине Зәнүфә Ғәүнетдин ҡыҙы Ғәрифуллина.

**Көнһылыу ҒӘЛИЕВА.**
**Салауат районы.**

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Ошо көндәрҙә Сибай институты бинаһы диуарында Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтовтың яҡты иҫтәлегенә мемориаль таҡтаташ асылды. Тантананан һуң 1999 йылдан Сибай институтын етәкләгән шәхес иҫтәлегенә арналған фәнни-ғәмәли конференция үтте. Замандаштары ил ағаһы кимәлендәге арҙаҡлы шәхестең эшмәкәрлеге тураһында һөйләне. Һүҙ - уларға:**

# МӘҢГЕЛЕККӘ БЕР АҘЫМ




***Зариф БАЙҒУСҠАРОВ, РФ Дәүләт Думаһы депутаты:*** Зиннур Ғөбәйҙулла улын Башҡортостаныбыҙҙың иң фиҙаҡәр улдарының береһе тип һанайым. Ул оҙаҡ йылдар Сибай ҡалаһы башлығы булып эшләне, Сибай ҡалаһын ғына түгел, Урал аръяғын үҫтереүҙә лә ҙур эштәр башҡарҙы. Ә инде Сибай институтын тергеҙеүҙә, етәкселек итеүҙә уның роле баһалап бөткөһөҙ. Уның идеяһы буйынса Сибай институты биләмәһендә ҡуйылған халҡыбыҙҙың билдәле кешеләренә бюстар республиканың башҡа бер генә юғары уҡыу йортонда ла юҡ. Йәштәр милләтебеҙҙең тарихын, арҙаҡлы шәхестәрен белергә тейеш, ти ине ул.

Шуныһы аянысло: арабыҙҙан бик иртә китте ағайыбыҙ. Әлеге ваҡытта етәксе вазифаһында эшләгән кешеләр уның юлын, башлаған эштәрен дауам итергә тейеш, сөнки Зиннур Ғөбәйҙулла улының бик күп кешелек сифаттары үрнәк булырлыҡ - һәр нәмәне аңлап, урынына еткереп эшләй белгән аҡһаҡалға тиң ине ул. Сибай ҡалаһының яңы башлығы Азамат Мырҙағәли улы Юлдашбаев, Сибай институты директоры Илдар Сәлихйән улы Хәмитовтар менән Зиннур Ғөбәйҙулла улы хөрмәтенә ғилми-ғәмәли конференция үткәрергә тип алдан уҡ һөйләшкәйнек, бына шуны тормошҡа ашырып ҡуйҙыҡ. Шәхсән үҙем институтта Зиннур Йәрмөхәмәтов тураһында мәғлүмәттәр тупланған айырым мөйөш булдырырға тәҡдим иттем. Сибайҙа берәй яңы урамға Йәрмө-хәмәтов исемен бирергә тигән тәҡдим дә хуплау тапты. Киләсәктә һәйкәлме, бюсмы ҡуйыу тураһында ла уйларға кәрәк, сөнки ул быға бик тә лайыҡлы кеше.

***Хәләф ИШМОРАТОВ, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәре:*** Мин - республиканың мәҙәниәт министры, Зиннур Ғөбәйҙулла улы Сибай ҡала хакимиәте башлығы булып эшләгән осорҙа Сибай филармонияһына дәүләт филармонияһы статусы бирҙек, республика учреждениеһы итеп финанслау мәсьәләһен Мәҙәниәт министрлығы тулыһынса үҙенең өҫтөнә алды. Сибай ҡалаһында Урал аръяғы райондарын социаль-иҡтисади яҡтан үҫтереү буйынса байтаҡ кәңәшмәләр үтә торғайны ул ваҡытта. Шуларҙың береһендә урта махсус музыка мәктәбе булдырыу тураһында ҡарар ҡабул иттек. Шулай уҡ балалар театры асыу буйынса байтаҡ эштәр башҡарылды. Аҙаҡҡы ҙур мәҙәни проект - колхоз-совхоздар тарҡалған ваҡытта Урал аръяғы балаларына Өфөгә килеү мөмкинлеге ауыр булыуын иҫәпкә алып, Өфө сәнғәт училищеһының филиалын асыу булды. Бөгөнгө көндә республиканың сәнғәт күгендә балҡыған бик күп йондоҙҙар ошо уҡыу йортонда белем алды, ҙур ижад юлына сыҡты.

Зиннур Ғөбәйҙулла улы ул осорҙа магнит кеүек Урал аръяғы райондары хакимиәт башлыҡтарын бергә туплап торҙо. Сибайҙа йыйылышып, төрлө ҡарарҙар ҡабул иттеләр һәм уларҙы тормошҡа ашырыу буйынса бик күп эштәр башҡарылды. 90-сы йылдар, ике меңенсе йылдар башындағы хакимиәт башлыҡтарының эшмәкәрлегенә анализ яһап ҡараһаң, Зиннур Ғөбәйҙулла улы кеүек ҙур эштәр башҡарған хакимиәт башлығы юҡ. Урал аръяғы проблемаларын яҡшы белгән кеше булараҡ, шуны әйтә алам: Сибай тарихында (башҡа хакимиәт башлыҡтары үпкәләмәһен) уның кеүек тәрән эҙ ҡалдырған, Сибайҙың ғына түгел, ғөмүмән, Урал аръяғының һәм башҡорт халҡының проблемаларын төптән аңлаған кеше тарихта әлегә булғаны юҡ. Төптән уйлап, төплө фекер йөрөткән көслө шәхес булды ул.

Һуңғы йылдарын сит тарафтарҙа үткәреүе, сит тарафта ерләнеүе минең өсөн, шәхсән, үкенес тойғолары ҡалдырҙы. Зиннур Ғөбәйҙулла улының эшмәкәрлегенә дөрөҫ баһа биреп, исемен мәңгеләштереү буйынса Урал аръяғы райондарында, Сибай ҡалаһында аныҡ эштәр башҡарылһа, бик дөрөҫ булыр ине. Ҙур шәхестең тормошо, эше, һис һүҙһеҙ, йәш быуынға, Сибай институтында уҡыған студенттарға өлгө булып торорға тейеш.

***Вәкил ХАЖИН, педагогика фәндәре кандидаты:*** Зиннур Ғөбәйҙулла улы менән ун бер йыл бергә эшләү осоронда уның менән бер тапҡыр ҙа һүҙгә килешмәнек, ниндәй генә мәсьәлә булмаһын, уртаҡ фекергә килә инек. Ул беҙҙең һәр бер идеяны ғәмәлгә ашырыуға мөмкинлектәр тыуҙыра белде. Ул саҡта Урал аръяғы балалары Өфөләге юғары уҡыу йорттарына бик килә һалып барманы. Сибайҙағы институт шуны уйлап асылды ла инде.

Төп эште тәртип урынлаштырыуҙан башланыҡ. Мәҫәлән, күп кенә юғары уҡыу йорттарында студенттарҙың дәрескә йөрөшөн тикшермәйҙәр, ә беҙ был күрһәткесте йөҙ процентҡа еткерҙек, дәрестәргә йөрөмәү беҙҙең институт өсөн ят күренеш ине. Еңелдән булманы, әлбиттә. Сәғәт һигеҙҙә ишектәрҙе бикләй башлағайныҡ, дәрескә һуңлауҙар ҙа бөттө. Студенттар дәрес ваҡытында коридорҙа йөрөмәһендәр өсөн пейджиктар таҡтыра башланыҡ, уҡытыусыларҙан да шуны талап иттек. Тәртип бит ул иң тәүҙә яуаплылыҡ тигән һүҙ. Ниндәй белем алыу ғына түгел, киләсәктә нисек эшләй алыу ҙа студент өсөн бик мөһим. Биш йыл буйына аныҡ тәртипкә өйрәнгән кеше эшкә һәләтле булып сыға, шуғалыр ҙа беҙҙең студенттарыбыҙ аҙаҡ дәрәжәле-дәрәжәле урындарҙа эшләй башланылар.

Урал аръяғында ауыл хужалығы тармағы киң йәйелгән. Шуны иҫәпкә алып, ике йыллыҡ курстар астыҡ, әммә студенттарыбыҙҙы өсөнсө курсҡа ҡабул итергә теләүселәр булмай сыҡты. Үҙебеҙҙең ауыл хужалығы институты етәкселеге лә быға ризалашманы. Ул ризалыҡты Троицк ҡалаһындағы ветеринар медицина академияһында таптыҡ. Элек улар абитуриенттарҙы Ҡаҙағстандан йыя торған булғандар, юлдар ябылғас, студенттар етешмәй башлаған. Улар менән бәйләнешкә индек: ике йыл беҙҙә уҡыған студенттарҙы Троицкиға күсерергә килештек. Шулай итеп, ете йөҙләп студентыбыҙ ветеринар медицина академияһының дипломын алды. Зиннур Ғөбәйҙулла улы менән фекерҙәш булмаһаҡ, быларҙы эшләп булмаҫ ине. Физкультура дәрестәрен дүртенсе курсҡа тиклем уҡытыуҙы ойоштороу ҙа яңылыҡ булды. Беҙҙә һикһән процент башҡорт балалары уҡығас, башҡорт теле дәрестәрен бөтә төркөмдәргә лә индерҙек.

Ул осорҙа Мәскәүҙән тикшереүҙәр йыш булды. Мәҫәлән, мин эшләгән ун бер йылда улар өс тапҡыр тикшерҙеләр. Бәләкәй генә Сибайҙа шундай шәп уҡыу йорто булыуына һәр саҡ аптырайҙар ине. Берәүҙең әйткәне һаман хәтеремдә: "Әгәр ҙә мин Сибайға ауылдар һәм үтә тигеҙ булмаған юлдар аша килгәнемдә күрмәһәм, күҙемде йомдороп ҡына килтереп төшөрһәләр, Европалағы берәй уҡыу йортона килгәнмен, тип уйлар инем... "

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йола үтәлде, Зиннур Ғөбәйҙулла улы Йәрмөхәмәтов иҫтәлегенә Сибай институты бинаһы диуарында мемориаль таҡтаташ асылды. Ҡалғаны ваҡыт хөкөмөндә һәм халҡыбыҙҙың (бигерәк тә сибайҙарҙың) хәтер тәрәнлегендә.**

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ яҙып алды.**

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ерҙә тормош нисек ҡоролған?

Ошо йомғаҡлау өлөшөнөң йөкмәткеһе өҫтөндә эшләгәндә күргән өндәге төшөмдә башыма ҡайҙандыр шундай һүҙҙәр килде:

Беҙ Аллаһы Тәғәләгә шулай тейешле кеүек ҡараныҡ. Усаҡ тоҡандырған һайын, беҙ һәр саҡ Аллаһы Тәғәләгә доғаларыбыҙ һәм йолаларыбыҙ өсөн рәхмәт уҡыныҡ. Беҙ уға иртән йоҡонан уянғанда һәм кисен йоҡларға ятҡанда рәхмәтле булдыҡ. Беҙ Илаһилыҡты һәм тәбиғәтте айырманыҡ. Аллаһы Тәғәлә беҙҙең Ижадсы ла, дуҫыбыҙ ҙа булды. Кеше, тәбиғәт һәм Аллаһы Тәғәлә - бер үк нәмә.

Кем генә булһағыҙ ҙа, рәхмәт һеҙгә! Был һүҙҙәр бик ваҡытлы һәм бик урынлы булды. Ижадсыны һәм дуҫыбыҙҙы данлап, йолаларыбыҙҙы тотоуҙы дауам итһәк, Ерҙә тормош тағы ла яҡшыраҡ булыр ине.

1993 йылда Чикагола үткән Донъя диндәре конгресында 8000-дән ашыу кеше ҡатнаша. Ул бер аҙна дауам итә һәм форум һуңында хәҙерге донъялағы аяныслы хәлдәрҙе асыҡлаусы факторҙар билдәләнә. Улар: миллионлаған кешене хәйерселек, аслыҡ һәм ғаиләләрҙең тарҡалыуы менән ыҙалатҡан эшһеҙлек; наркомания менән нығытылған ойошҡан енәйәтселек; быуындар, енестәр, расалар һәм диндәр араһындағы көсөргәнешле мөнәсәбәттәр; эшҡыуарлыҡтағы һәм сәйәсәттәге коррупция; көрсөк сигенә еткерелгән экосистеманың ауыр хәле.

Конгреста ҡатнашыусылар бер тауыштан яңы дөйөм этикаға мохтажлыҡ тыуыуын билдәләй. Бының өсөн кешелек шундай ҡағиҙәләргә буйһонорға тейеш: һәр кешегә гуманлы мөнәсәбәт булдырырға; тиң хоҡуҡлылыҡ һаҡланырға; һәр мәҙәниәттә иғтибарлылыҡҡа һәм түҙемлелеккә, дөрөҫлөккә айырым иғтибар бирелергә; донъяла ғәҙел иҡтисади тәртип урынлаштырылырға; былар барыһы ла мөмкин булһын өсөн һәр кеше аңының тәрән үҙгәрештәрен кисерергә тейеш.

Һуңғы талапҡа айырым баҫым яһалһа ла, берәү ҙә кешенең аңын нисек күтәреү тураһында бер һүҙ ҙә әйтмәне.

Мең самаһы рухи лидерҙың вәкәләтле йыйылышы ни өсөн шәхси аң-зиһендең дөрөҫлөгөнә һәм аңдың үҫеү мәсьәләләренә асыҡлыҡ индермәй һуң? Һәр кеше үҙенә-үҙе, сит кешенең ҡыҫылышынан башҡа ла ярҙам итә алыуын аңлау урынына беҙҙең рухи юлбашсыларыбыҙ үҙҙәрен ғаләмдең үҙәге итеп тоямы икән ни? Бәлки, улар, эшһеҙ ҡалыуҙан ҡурҡалыр?

Алда яҙғандарым ошоно аңлата ла инде. Йәмғиәткә, илгә, тотош донъяға түгел, ә тап һеҙгә аңлата. Һеҙ шәхси тормошоғоҙҙа глобаль этиканың емештәрен тирә башлайһығыҙ. Һеҙгә башҡалар ҙа эйәрһә, ул ҙурыраҡ йоғонтоға эйә буласаҡ. Конгреста һүҙ алып барған идеалдарға шулай итеп кенә өлгәшергә мөмкин.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# БЕР УЙЛАҺАҢ, БӨТӘ ҒҮМЕР - БОҘ ӨҪТӨНДӘГЕ УСАҠ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**46-сы һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Завод. Бикбаев. Туфан. Ҡанат. Әйтем. Артхаус. Өсмөйөш. Әрмәк. Сирень. Туғай. Йод. Парта. Иртә. Шарт. Рәсәй. Биҙ. Раҫлама. Әйбер. Ғарипов. Серәкәй.

**Вертикаль буйынса:** Өмөтбаев. Ҡамсығорт. Йөҙйәшәр. Буҙа. Ашығыс. Ташсы. Закат. Йүтәл. Ауди. Фәхретдин. Барто. Диван. Вий. Әсә. Пәрҙә. Роза. Әй. Мүк. Аҡйор.

*СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*

## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**30 ноябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия. 12+

**1 декабрь "Хыялға ҡаршы"** (А. Баймөхәмәтов, А. Ишбулдина инсц.). 12+

**2 декабрь "Урал батыр"** (Башҡорт халыҡ эпосы буйынса). 12+

**3 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай, З. Исмәғилев), музыкаль комедия. 18.00 12+

**4 декабрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури). 18.00 16+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**29 ноябрь "Созвездие талантов"** Гала-концерт. 15.00 6+

**1 декабрь "Ике аҡҡош"** Бөтә Рәсәй конкурсы Гала-концерты. 6+

**3 декабрь "Музыку слушаем вместе".** 11.00 0+

**"ЗАУЭРФЕСТ"** сиктәрендә органда - Алексей Семенов. 18.00 6+

**"Бәйләнештә"** 1-се башҡорт блогерҙары концерты. 18.00 6+

## Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**28 ноябрь** Йылайыр районы Матрай ауылында, **29 ноябрь** Ейәнсура районы Иҫәнгол ауылында **"Һәйбәт ҡыҙыҡай Лида"** (А. Ивашкин), трагикомедияһы (12+) һәм **"Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедияһы (12+) менән гастролдәрҙә.

**30 ноябрь "Алға, Баламишкин!"** (Ф. Бүләков), музыкаль комедияһы. 12+

## А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры

**29-30 ноябрь "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия. 13.00, 18.00 12+

**1-2 декабрь "Өлкән улым"** (А. Вампилов), комедия. 13.00 12+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 декабрь Премьера! "Шинель"** (Н.В. Гоголь), Денис Хисамов уҡый. 6+

**3 декабрь "Ҡоҙаса"** (Б. Бикбай), музыкаль комедия. 18.00 12+

**4 декабрь "Золотой осел Насретдина"** (Ш. Казиев), музыкаль әкиәт. 12.00 0+

**"Тормош - ҡуласа"** (Т. Миңнуллин), драма. 18.00 12+

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Ноябрь - Декабрь (Йомадиәл әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (4) дүшәмбе | 7:42 | 9:12 | 13:30 | 15:08 | 16:54 | 18:24 |
| 29 (5) шишәмбе | 7:44 | 9:14 | 13:30 | 15:07 | 16:53 | 18:23 |
| 30 (6) шаршамбы | 7:46 | 9:16 | 13:30 | 15:06 | 16:52 | 18:22 |
| 1 (7) кесе йома | 7:47 | 9:17 | 13:30 | 15:06 | 16:51 | 18:21 |
| 2 (8) йома | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 15:05 | 16:51 | 18:21 |
| 3 (9) шәмбе | 7:50 | 9:20 | 13:30 | 15:04 | 16:50 | 18:20 |
| 4 (10) йәкшәмбе | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 15:04 | 16:49 | 18:19 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# БӘЙГЕ

**Баш йортобоҙҙа төрлө мәҙәни саралар үтеп тора, сөнки уларға тамашасының ихтыяжы бар.**

"Башҡортостан" дәүләт концерт залы **"Ҡышҡы романс"** республика актер йыры конкурсында ҡатнашырға саҡыра. Конкурс Башҡортостан Республикаһының Мәҙәниәт министрлығы булышлығында билдәле башҡорт композиторы **Рим Хәсәнов** призына уҙғарыла. Конкурста ҡатнашыу өсөн композитор Рим Хәсәнов спектаклдәренең репертуарынан йырҙар яҙҙырылған видеофайлдар ебәрергә кәрәк. Анкета 2022 йылдың 1 декабренә тиклем 2723700@bk.ru электрон почтаһына ҡабул ителә. Бүләкләү тантанаһы 12 декабрҙә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында була, шунда уҡ конкурс еңеүселәре иғлан ителә.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Ноябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Мәләүеҙ районы** Эткөсөк ауылынан Минзәлә Сангишева, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Әлфиә Ишбулатова, Фәнилә Хәйруллина, Динә Ханова, Сания Исламетдина, Илсур Ғайсин, Гөлнира Аҡбулатова, **Балтас районы** Иҫке Балтас ауылынан Миләүшә Әхмәтйәнова, **Мәсетле районы** Дыуан-Мәсетле ауылынан Зилә Рәхимова, **Бөрйән районы** Ҡотан ауылынан Шәүрә Манапова, **Миәкә районы** Тамъян-Таймаҫ ауылынан Сәимә Исламғолова, **Әлшәй районы** Яңы Сәпәш ауылынан Н. Г. Фәйзуллина, **Өфө ҡалаһынан** Зәкиә Ҡунаҡасова, **Ишембай ҡалаһынан** Миңлехаят Йосопова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Барығыҙға ла ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бәхетле оҙон ғүмер, ғаилә именлеге, ҡыуаныс-шатлыҡтар теләйбеҙ.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

ЗАУЫҠ

# ӘСӘЙҘӘР КӨНӨ МЕНӘН!

## Унын күңеле...

Әсә күңеле - тәрән диңгеҙ, тиҙәр,
Шикләнмәйем, ысын, шулай бит.
Ул күңелгә күпме шатлыҡ һыйһа,
Ҡайғылар ҙа бик күп һыя бит.

Ауырлыҡтың барын онота ул
Балаһының бәхете хаҡына,
Тик балалар әсәй күңелдәрен
Аңлай алмай ҡала йыш ҡына.

Мәшәҡәтһеҙ-ниһеҙ ҙурайғандай,
Үҫеп алғас, ҡайһы балалар,
Әсәйҙәргә ауыр һүҙҙәр әйтеп,
Уңалмаҫлыҡ яра һалалар.

Әсә күңеле тәрән, киң дә, тиҙәр,
Кисерер ул, бәлки, балаһын.
Һаман өҙөләр ул, "балам", тиеп,
Һыҙлаһа ла йөрәк яраһы.

**Кәтибә КИНЙӘБУЛАТОВА.**

## Төштә күрҙем һине

Бөгөн, әсәй, һине төштә күрҙем:
Һағыш баҫҡан ине йөҙөңдө,
Сумған инең уйҙар дарьяһына,
Тәҙрәгә текләп күҙеңде.
Әллә, әсәй, сырхап тораһыңмы,
Бошоп тора мәллә эскәйең?
Йыуатырға һине ниндәй генә
Һүҙ табырға икән, әсәйем?
Һағышыңды һыпырып алыр инем
Сал сәсеңде һыйпап, ҡулыңды...
Араларҙа саҡрымдар ята, -
Тауҙар юлы арбай улыңды.
Тормош, гүйә, ошо тауҙар кеүек:
Әйләнһәң дә ҡая ҡошона,
Хәүефтәрҙән ҡурсып, уттар йотоп,
Һинең өсөн әсә бошона.
Ирҙәр алмаҫ үрҙәр юҡ донъяла, -
Тейгәндә лә башың болотҡа,
Моңһоу күҙен тәҙрәгә төбәп,
Әсәй көткәнлеген онотма!
Бөгөн, әсәй, һине төштә күрҙем...

**Салауат ӘБҮЗӘР.**

## Һин онотма...

Һәр әсәгә үҙ балаһы
Түрҙәге түрә кеүек,
Тик ул ғына бар донъяны
Яҡтыға төрә кеүек
Ябай таштар араһында
Балаһы аҡыҡ кеүек
Балаһына тейер булһа,
Хаҡ һүҙ ҙә нахаҡ кеүек.
Әле тик таң .
Әле һиңә
Бараһы ла бараһы:
Әсә ҡарғыштарын алма
Юлға, әсә балаһы.
Ҡытай тоғондай ҙур нәфсе
Алырҙан элек ҡара:
Әсә ҡарашында ниндәй
Өмөттәр ҡаурый яра.
Һиңә иптәш, дуҫтар осрар
Бергә юл ҡыуғанында.
Хыянат алдынан иҫлә
Әсәнән тыуғаныңды.
Дошман осрар.
Ҡая кеүек
Ҡаршыңда торғанында,
Һуңғы ҡат тапар алдынан
Һин онотма
Әсәнән тыуғаныңды.
Юлың оҙон.
Моғайын, тим,
Моратыңа етерһең.
Тик юлда әҙәм рәнйетмә -
Әсәһен рәнйетерһең.

**Рәмзилә ХИСАМЕТДИНОВА.**

## Тынлыҡ

Әйтелмәгән һүҙҙәр - күп нөктәләй
Теҙелешкән оҡшап муйылға,
Ул һүҙҙәрҙең хәҙер ни ҡәҙере,
Ағасынан муйыл ҡойолғас.
Бына-бына әйтәм, тип мәлендә
Муйынсаҡтай теҙеп йыйылған,
Тик ниндәйҙер ялған тынлыҡты
Һаҡлап өндәшеүҙән тыйылған,
Шартлауҙарҙан аяп тирә-яҡты,
Тын торһон тип донъя быйылға,
Әсә кеше генә һәләтлелер
Үҙ йәндәрен үҙе быуыуға.
Әйтелмәгән хистәр күп нөктәләй
Теҙелешкән оҡшап муйылға.
Муйыл һөйәгеләй йөйҙәр булып
Йөрәккә ни ырып ҡайылған?
Яҡындар һәм яттар күңелен уйлап
Өндәшелмәй ҡалған һүҙҙәр ул,
Белгәнен дә, булғанын да әйтмәй
Мөлдөрәшеп ҡалған күҙҙәр ул...
Тынлыҡ үлсәмдәре - бала хаҡы,
Эстә шартлап йәнгә йөй һалған.
Моңло ҡурайҙың да тыны етмәҫ
Оҙондарҙан оҙон көй һалған...
Шундай оҙон тынлыҡ,
Мең ҡурайҙың
Тыны етмәҫ тынлыҡ - бар бит ул,
Әсә йөрәгенә йәшерелгән
Сикһеҙ бәхет, тәрән зар бит ул...

**Гөлнара ХӘЛФЕТДИНОВА.**

## Ашығайыҡ өйгә...

Әсәйҙәргә ваҡытыбыҙ етмәй,
Ашығабыҙ, бөтмәй эшебеҙ,
Сит-яттарға ярҙам күрһәтәбеҙ,
Әсәй көтөр - ул үҙ кешебеҙ!
Беҙҙең өсөн тик ул янып-көйә,
Көтә тәмлекәстәр бешереп,
Һыҙланыуын беҙгә һиҙҙермәйсә,
Төндә эсә дарыу йәшереп.
Күп һөйләйбеҙ, ләкин иң кәрәкле,
Иң ҡәҙерле һүҙҙе әйтмәйбеҙ,
"Ҡабаланам, әсәй, хуш хәҙергә!"-
Яуап биргәнен дә көтмәйбеҙ.
Эстән генә доғаларын уҡып,
Йүгерә-атлай ҡала оҙатып,
Төн йоҡламай аҙаҡ беҙҙе уйлап,
Беҙ китәбеҙ шулай илатып.
Күп кәрәкме уға? Ул бит әсәй!
Сикәһенә терәп сикәне,
"Һин кәрәкһең, әсәй, һағынам", -
тип
Бер ҡосаҡлап уны үпһәңсе!
Ҡояш кеүек балҡыр әсә йөҙө,
Йөрәгенә килер еңеллек...
Ошо йөрәк әле типкән саҡта
Ашығайыҡ өйгә иң элек!

**Фирүзә АБДУЛЛИНА.**

## Күккә тиңләр инем

Әсә һүҙе шундай яғымлы ул,
Иң изге һүҙ барлыҡ донъяла.
Ошо һүҙҙән Тыуған ил башлана,
Телен аса тыуған һәр бала.

Мин әсәмде күккә тиңләр инем,
Йөҙкәйҙәре уның - аяҙ күк.
Сәскән изгелеге сәскә булһа,
Ерҙе ҡаплар ине хәҙер үк.

Күңелдәре йыһан киңлегендәй,
Тауыштары - тауҙар шишмәһе.
Әсә мөхәббәте - төпһөҙ диңгеҙ,
Тамсыһы ла уның кипмәһен.

Мин әсәмде айға тиңләр инем,
Ҡараштары уның - көмөш ай.
Ай яҡтыһы менән бәхет һорап,
Мине көткән әсәм йоҡламай.

Һағынып та ҡайтып был күреүем,
Бар күңелдән тәбрик итеүем,
Һинең өсөн бөгөн был алҡыштар,
Әсәм - минең уңыш бетеүем.

**Р. МАНСУРОВА.**

## Тыуыр балама өндәшәм

*Эссе*

- Мин һине шул тиклем яратам, әсәкәйем!.. Һинең менән осрашыуҙы көтәм. Өҙөлөп-өҙөлөп көтәм, әсәкәйем!

- Мин дә һине яратам, балам, балаҡайым! Күҙ нурым минең!.. Беҙ осрашҡан көн иң бәхетле көнөбөҙ булыр. Яҡты донъяларға яралырға тап мине һайлағаның өсөн рәхмәт, балаҡайым!

- Ә мин һине таныйым инде. Йомшаҡ ҡына, йылы ғына ҡулдарыңдан, наҙлы тауышыңдан, һөйөү менән тулы бишек йырҙарыңдан, минең өсөн борсолоуҙарыңдан таныйым... Йыһандың теге яғында шартлау тауыштары ишеттеңме, һин тертләп уянаһың. Шул саҡта мин һине нисек итеп йыуатырға белмәйем. Беҙ осрашҡас, һин, моғайын, иламаҫһың. Мин һине хәүеф-хәтәрҙәрҙән аралап ҡына йәшәрмен. Мин һине илатмам! Ә әлегә минең менән көн дә һөйләш, йәме, әсәкәйем! Һин минең менән һөйләшһәң, миңә шул тиклем рәхәт, шул тиклем тыныс!..

- Беҙҙең һөйләшәһе һүҙҙәребеҙ күп, бик күп әле, тик ғүмерле генә бул, балаҡайым! Ҡарынымда һин яралған көндән алып ниҙәр уйлап, ниҙәр кисергәнде яҙып та, аңлап та, аңлатып та бөтөп булмай, балам!.. Һинең барлығыңды белеү генә лә - бәхет! Ысын бәхет! Һине ҡулдарыма алыр көн һинең - бәхетле, минең тәхетле көнөм булыр. Әсә булыу бәхетен башҡа бер ниндәй тойғо менән дә алмаштырып булмай. Ҡатын-ҡыҙ кисергән иң саф, иң мөҡәддәс тойғо ла шулдыр ул, балам.

Борсолоуҙарымды, тертләп уяныуҙарымды аңлағаның өсөн рәхмәт! Һинең төштәреңдә донъяның аһ-зарынан аяғым килә. Күңелең бөтөн генә килеш, күңелең дә, йөрәгең дә ҡанатлы килеш кил был яҡты донъяларға. Һин тыуаһы донъяларҙың Ай-Ҡояшы иҫән булһын, һин тыуаһы донъяларҙа күҙ йәштәре түгелмәһен, ҡанатланып осаһы офоҡтарың тыныс, аяҙ, яҡты булһын, йыуанысым, ҡыуанысым, бәхетем минең!

**Ғәлиә КӘЛИМУЛЛА.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## ҒӘҘӘТИ КЕШЕЛӘРҘӘН БАШҠА...

### бөйөктәр яралмай

Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрешергә килер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Бөтә нәмәлә лә ағыу бар: дәүмәле уны йә ағыуға, йә дарыуға әйләндерә.

**(Парацельс).**

Ысын мөхәббәт алтындан һәм балсыҡтан шуныһы менән айырыла: бүленгәндә лә ул бәләкәсәймәй.

**(Перси Шелли).**

Ғорурлыҡ - хаталарыңдың битлеге ул.

**(Йәһүд мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Оҙон, бормалы һәм һикәлтәле юл буйлап эт эйәрткән бер сәйәхәтсе килә. Ул бик арыған, эте лә хәлдән тайған. Ҡапыл уның алдында матур ҡапҡалы йәм-йәшел баҡса хасил була. Баҡса эсендә музыка яңғырай, сәскәләр күҙҙең яуын ала, шишмә сылтыраған тауыш ишетелә. Ҡапҡа төбөндә торған ҡарауылсынан сәйәхәтсе:**

**- Был ниндәй урын? - тип һорай.**

**- Был ожмах, - ти ҡарауылсы. - Һин бит мәрхүмдәр донъяһында.**

**Ин, әйҙә, ожмахта ял ит.**

**- Ә унда һыу бармы?**

**- Бар, әлбиттә. Фонтандар, бассейндар ҙа бар.**

**- Ә ашарға бирәләрме һуң?**

**- Нимә теләйһең, шуны ашай алаһың.**

**- Минең этем дә бар.**

**- Йәл, ләкин бында эт менән бергә үткәрмәйҙәр. Уны ҡапҡа төбөндә ҡалдырып китергә тура килә инде.**

**Сәйәхәтсе был һүҙҙәрҙе ишеткәс, ҡапҡа аша үтмәй, ары китә. Бер аҙ барғас, юл уны ниндәйҙер икенсе бер тораҡ янына алып килә. Уның ҡапҡаһы төбөндә лә ҡарауылсы ултыра.**

**- Һыу эсергә ине... - ти сәйәхәтсе.**

**- Ин, әйҙә, ихатала ҡоҙоҡ бар.**

**- Ә минең этемә инергә рөхсәтме?**

**- Рәхим итһен, ҡоҙоҡ эргәһендә эт өсөн һыу улағы ҡуйылған.**

**- Ә ашарға буламы?**

**- Була, әлбиттә. Мин үҙем һине киске аш менән һыйлай алам.**

**- Ә этемә ашарға табылырмы?**

**- Һөйәкте генә табабыҙ инде уны...**

**- Ә был ниндәй урын булды һуң?**

**- Был - ожмах.**

**- Нисек инде улай? - тип аптырай сәйәхәтсе һәм әле генә инмәй үтеп киткән баҡса яғына төртөп күрһәтә. - Уны ла ожмах тигәйнеләр...**

**- Алдайҙар. Унда - тамуҡ, - ти ҡарауылсы.**

**- Ә был ялғанға һеҙ нисек түҙәһегеҙ?**

**- Ә был беҙҙең өсөн бик файҙалы, - ти ҡарауылсы. - Ожмахҡа дуҫтарын ташлап китмәгәндәр генә килеп етә бит..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22047

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды
(453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |
| **Матбуғат таратыу** | **252-39-99** |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
25 ноябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1490